*"Бер өлкән генә ҡатын юлда китеп барғанда машина аҫтына ҡалып, яраланып, үлә алмай ятҡан йыланға тап була. Ҡатын уны өйөнә алып ҡайта, дауалай. Йылан яраларынан төҙәлһә лә, ҡатын уны тәрбиәләүҙән туҡтамай, йортонда йәшәтә. Байтаҡ ваҡыт үтә. Бер саҡ ҡатын урамға сыға һәм уға эйәреп шыуышып килгән йыланды бергә йөрөтөргә ниәтләп, күтәреп ала. Йылан уны саға. Ҡатын ауыртыуға түҙә алмай ҡысҡырып ебәрә, үҙе бер туҡтауһыҙ: "Ниңә һин мине саҡтың? Беҙ дуҫ инек бит, мин бит һине ҡотҡарғайным! Мин һиңә ышана инем!" - тип һамаҡлай. "Ханым, һин мине ҡотҡарған саҡта уҡ минең йылан икәнемде белә инең бит..." тип мыҫҡыллы яуаплай йылан..."*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4 - 10 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2014 йыл

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№40 (614)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Йыраҡҡа илткән юл...**

яҡындан башлана




3

**Башҡортостаныбыҙ...**

Беренсе донъя һуғышы осоронда



7

**Сәнғәтебеҙ йөҙөн...**

профессиональ музыка билдәләй



11

**Иман нуры тарата ул,**

йәғни "Йома"ның мәнсе тапшырыуы айҡанлы һүҙ



12-13

14 ТВ-программа


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Бәхетле, етеш ҡартлыҡты нисек тәьмин итергә?



***Шәмилә МӘҠСУТОВА, Дәүләкән ҡалаһы:*** Ҡартлыҡ - тормоштоң ҡотолғоһоҙ нәтижәһе. Бер кем дә унан ҡасып ҡала алмай. Ҡайһы берәүҙәрҙе тәбиғәттең был тәбиғи процесы ҡурҡыта һәм улар ҡартлыҡҡа оло хәүеф менән ҡарай. Уларҙы аңларға була, сөнки олоғайған көндә һаулыҡ йәш саҡтағы ныҡлығын юғалта, эшләү кәрәк түбәнәйә. Ә былар иһә оло кешене үҙен йәмғиәткә кәрәкмәгән йөк кеүек итеп тойорға мәжбүр итә. Шуға күрә йәшлектә саҡта уҡ ҡартлыҡты матур итеп ҡаршыларға, оло йәшкә еткәс тә тормош мәғәнәһен юғалтмаҫлыҡ итеп йәшәргә әҙерләнеү мөһим. Быwww өсөн йәштән үк һаулығыңды ҡайғыртырға, үҙ-үҙең һәм йәмғиәт менән килешеп йәшәргә, намыҫлы һәм эшһөйәр булырға кәрәк. Үҙемдең һәм ҡартымдың нәҡ ошо ҡағиҙәләрҙе тотоуыбыҙ бер быуатҡа тиң йәшкә етеүебеҙгә булышлыҡ итеүенә иманым камил. Әлеге ваҡытта беҙгә 80-шәр йәш, ләкин үҙебеҙҙе ҡарттар рәтенә ҡуймайбыҙ. Йәш быуын күҙлегенән ҡарағанда, беҙ йәшәрен йәшәгән, ашарын ашаған оло йәштәге әбей менән бабай. Тик беҙ әле үҙебеҙҙә тулы ҡанлы тормош менән йәшәүгә ынтылыш һәм мөмкинлек, бүлә-бүләсәрҙәребеҙҙе тәрбиәләргә ярҙам итерлек көс тоябыҙ. Оло йәшебеҙҙе алға ҡуйып, кәрәккән-кәрәкмәгәнгә бөлә һалып, ураған һайын балаларҙан ярҙам һорап, уларҙы мәшәҡәтләргә яратмайбыҙ - үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күрәбеҙ.

Матурлыҡҡа һоҡланып, һәр атҡан таңға ҡыуанып ҡына йәшәп булмай, ашарға ла кәрәк бит әле, тиерҙәр күптәр. Бәхәсләшмәйем, матди яҡтан тәьмин ителгән булыу ҙа ҙур әһәмиәткә эйә. Ас ҡарынға донъяның йәмен күреү мөмкин түгел, әлбиттә. Тормош иптәшем менән был яҡты ла ҡайғырттыҡ. Беҙ бер ҡасан да кассаға оҙайлы һаҡлауға аҡса һалманыҡ, сөнки бабай "Аҡса - ул ҡағыҙ ғына, уны нимә менәндер нығытыу мөһим", ти. Шуға күрә, ғаилә бюджетынан бүленгән аҡсаға алтындан эшләнгән әйберҙәр һатып ала килдек. Әлеге көндә бик кәрәк ваҡытта уларҙы һатып ебәрһәк, пенсияға яҡшы ғына өҫтәмә була. Төрлө таштар менән биҙәлеп эшләнгән элекке алтын әйберҙәрҙең хаҡы юғары, сөнки уларҙы теләгән магазиндан алып булмай. Хәҙер ундай матур, зиннәтле, күркәм биҙәүестәр эшләмәйҙәр ҙә, барыһы ла бер төрлө, күҙгә ташланып торған үҙенсәлектәре лә юҡ.

Бына шулай, барыһына шөкөр итеп, шатланышып донъя көтәбеҙ. Хөкүмәтте әрләп, кемдәндер ниндәйҙер ярҙам көтөп ятмағыҙ, тип әйткем килә йәштәргә. Заманалар бер ҡасан да еңелдән булмаған, артабан да ерҙә ожмах булмаҫ, шуға күрә бөгөнгө менән генә йәшәмәгеҙ, ә киләсәгегеҙҙе лә ҡайғыртығыҙ, балалар. Барығыҙға ла иҫәнлек-һаулыҡ теләйем.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*БАШ ЙОРТТА*

# ГРАФФИТИ -

## ҡаланың яңы йөҙө

**Был сәнғәт төрөн кемдер хуплай, кемдер, киреһенсә, уға кире ҡараш та. Нисек кенә булмаһын, ҙур тиҙлектә үҫешеүсе урам сәнғәте - граффити ҡала мәҙәниәтенең бер өлөшө булараҡ, бөгөн донъяның күп илдәрендә киң билдәләнеш ала.**



Баш ҡалабыҙҙа йәшәүселәр Өфөнөң Менделеев урамындағы 116-сы йорттоң алғы яғына төшөрөлгән бейеүсе ҡыҙ һүрәтенә һоҡланып бөтөргә лә өлгөрмәне, Ленин урамында тағы ике урында граффити жанрында һүрәттәр барлыҡҡа килде. Ленин урамының 44/46-сы йорто стенаһындағы һүрәт Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Алексей Королевскийҙың "Өфө. Дуҫлыҡ монументы" тип аталған билдәле гравюраһының копияһы булып тора. Уны граффити буйынса белгес, рәссам Олег Кайбышев төшөргән, һүрәт төшөргәндә төҫө уңмай торған һәм һыуға бирешмәгән махсус буяуҙар ҡулланылған.

Ленин урамының 21-се йортонон алғы яғын биҙәйәсәк һүрәттә 1812 йылғы Бөйөк ватан һуғышы ваҡиғалары сағылыш ала. Уны бейеүсе ҡыҙҙы эшләүсе "Ижад ҡалаһы" реалити-шоу ҡатнашыусылары төшөрә. Ҡаланың боронғо өлөшө өсөн ҡулайлы тип табылған эскизда Наполеонға ҡаршы һуғышта ҡатнашыусы төрлө милләт вәкилдәре һүрәтләнә. Эксперттар билдәләүенсә, был граффити Башҡортостан халыҡтарының берҙәмлектә һәм татыулыҡта йәшәүенең тағы бер символы булып торасаҡ.





*✓ Бының өсөн әле йәшәгән фатирыбыҙҙы ҡуртымға биреп, шуның аҡсаһына көн итергә ниәтләйбеҙ. Шуға күрә әлеге ваҡытта ҡалаға яҡын райондарҙың береһендә ер һатып алып, шәхси йорт төҙөй башланыҡ.*



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ҠУЛЫ ОҪТА...
## аҡсаһыҙ ултырмаҫ



**Мин - машина ене "ҡағылған" ир-егеттәрҙең береһе. Бәләкәй саҡтан атайыма машина, трактор, мотоцикл йүнәтергә ярҙамлаштым. Шуға күрә был өлкәне һәйбәт беләм. Оҫталығымды килем килтереүсе шөғөл булараҡ ҡулланам - күсмә автосервис булдырҙым.**

Һәр машина даими иғтибар талап итә. Ләкин күпселек автомобиль хужалары "тимер ат"тарына көн һайын тейешле ваҡыт бүлә алмай. Шуға күрә минең хеҙмәт ҙур һорау менән файҙалана. Был эшмәкәрлек ярҙамында ҡатмарлы ремонт эшләп булмай һәм был маҡсатҡа ынтылырға ла кәрәкмәй. "Тәгәрмәс өҫтөндәге оҫта"ның төп бурысы - машинаның төҙөклөгөн контролдә тотоу, майын һәм башҡа шыйыҡсаларын, ҡалыб (колодка), тәҙрә таҙартыу ҡулайламаһын һәм башҡа ваҡ, әммә мөһим деталдәрен алмаштырыу, аккумулятор, шиналарҙың торошон ҡарау, салонды таҙартыуға ҡайтып ҡала. Быларҙы башҡарыу өсөн ҡыйбатлы ҡорамалдар кәрәкмәй. Тейешле урынға тиҙ барып етеү өсөн машина, шулай уҡ компрессор, саң һурҙырғыс, бер-ике домкрат, төрлө үлсәмдәге асҡыстар, автомобиль аҫтын ҡарау өсөн тәгәрмәсле ятыу ҡорамалы кәрәк буласаҡ. Шулай уҡ май, шәм һәм башҡа материалдар һатып та өҫтәмә аҡса алырға була.

Клиенттарҙы йәлеп итеү өсөн бағанаға иғландар йәбештереп сығыу ярҙам итмәйәсәк. Бындай хеҙмәт менән, ғәҙәттә, хәлле кешеләр ҡуллана, ә улар бағаналағы иғландарҙы уҡып йөрөмәй. Шуға күрә рекламаны уйлап башҡарыу мөһим. Ҡыйбатҡа төшһә лә гәзиттә иғлан баҫтырырға, радио һәм телевидение экраны аша әйттерергә мөмкин. Шулай уҡ сифатлы ҡағыҙға, иғтибарҙы йәлеп итерлек итеп эшләнгән визитка эшләтеү һәм уны таратыу ҙа файҙалы буласаҡ. Түләүле машиналар ҡуйыу урындарында автомобиль тәҙрәләренә бәләкәй иғландар ҡыҫтырып сығыу ҙа артыҡ булмаҫ. Клиенттарҙы бер йәки яҡын урынлашҡан бер-нисә офистан табырға тырышырға кәрәк. Бындай осраҡта ҡала буйлап бер урындан икенсе ергә сабып йөрөмәҫкә, ә тыныс ҡына үҙ эшеңде башҡарырға мөмкин.

Автомобилдәрҙе ҡарауҙы, ғәҙәттә, эш сәғәттәре ваҡытында башҡарам. Былай эшләү миңә лә, машина хужаларына ла ҡулай. Миңә ҡайҙалыр ҡала ситенә барып йөрөйһө түгел. Ә автоһәүәҫкәрҙәрҙе иһә эштән сығыуына ҡаралған һәм төҙөк машина ҡаршы ала.

Ҡулы оҫта аҡсаһыҙ ултырмаҫ, ти атайым. Ысынлап та, белгәнеңде урынлы файҙаланыу һәм килем алыу бер кемгә лә зарар итмәй. Техника менән дуҫ булғандарҙы минең эшмәкәрлек ҡыҙыҡһындырыр, тип уйлайым.

**Фәнүр АБДУЛЛИН,**
**Өфө ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# *Бәхетле, етеш картлыкты нисек тәьмин итергә?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Наил ҒӘЛИУЛЛИН, Сибай калаһы:*** Һорау еңелдән түгел. Ҡартлыҡты нисек ҡабул итәһең бит ул. Физиологик йәһәттән ҡарағанда, берәүҙәр 30 йәштә лә таушалып бөткән ҡарттай күренә, икенселәр 70-ен тултырһа ла, йәшлек һыҙаттарын ташламай, әүҙем тормош алып бара. Рухи яҡтан һүҙ йөрөткәндә, кемдер үҙен 17 йәштә үк бәлтерәгән ҡарттай тойһа, икенселәр 60-ҡа етеп тә, донъяға йәштәр күҙлегенән сығып ҡарау һәләтлеген юғалтмай. Барыһы ла кешенең көнитмешенә, күңел торошона бәйле.

Шәхсән үҙемә килгәндә, күптән инде йәшлек тупһаһын аша атлап үткән кеше булһам да, хаҡлы ялға сығыуға биш йыл ғына ваҡыт ҡалһа ла, үҙемде ололар рәтенә индермәйем. Әле минең йәштәштәрҙең гөрләтеп йәшәй, емертеп эшләй торған сағы. Баштан бала саҡ иләҫ-миләҫлеге осҡан, йәшлек иңендә ятҡан һөнәр һайлау, эш урыны табыу, ғаилә ҡороу кеүек бурыстар атҡарылып сығылған. Хәҙер иһә булғанына шөкөр итеп йәшәйһе һәм ҡартлыҡта бер ниндәй мохтажлыҡ кисермәйенсә көн итеү тураһында хәстәрләү ваҡыты. Беҙ, ҡатыным менән, был мәсьәләне хәл итеүгә әле үк тотондоҡ. Алла бирһә, һаулыҡ яғынан ныҡлыҡ булып, үҙ-үҙебеҙҙе ҡарай алһаҡ, матди яҡтан балаларҙан бойондороҡһоҙ булырбыҙ, тип ышанабыҙ. Быныӊ өсөн әле йәшәгән фатирыбыҙҙы ҡуртымға биреп, шуның аҡсаһына көн итергә ниәтләйбеҙ. Шуға күрә әлеге ваҡытта ҡалаға яҡын райондарҙың береһендә ер һатып алып, шәхси йорт төҙөй башланыҡ. Быға тиклем балаларҙы өйләндереү, уларға йортло булырға ярҙам итеү мәшәҡәттәре менән был теләк тормошҡа ашырылмай килде. Балалар фатирыбыҙ менән вафатыбыҙҙан һуң ғына үҙҙәре теләгәнсә файҙалана аласаҡ. Был документаль рәүештә нығытылған һәм балаларға әйтелгән. Бындай аҙымды балаларыбыҙға ышанмауҙан сығып түгел, ә ғаиләбеҙҙе кәрәкмәгән аңлашылмаусанлыҡтарҙан азат итеү маҡсатынан эшләнек. Шулай итеп, хеҙмәт итеү мөмкинлегебеҙ ҡалмаһа, беҙҙе ҡуртымдан килгән аҡса ҡотҡарыр, тип ышанабыҙ. Уға пенсияны ла өҫтәһәң, ике ҡарт кешегә ашар-эсерлек, кейем-һалым алырлыҡ матди база буласаҡ. Улай ғына ла түгел, кәләш менән төрлө илдәрҙе күреү теләге лә бар. Шуға күрә, алдыбыҙға алған ниәтте тормошҡа ашырып сығырлыҡ һәм балалар менән бергә-бергә ҡыуанышып йәшәрлек оҙон ғүмер бирһен Хоҙай, тип теләйбеҙ.

***Фәнил КӘРИМОВ, Магнитогорск металлургия комбинаты эшсеһе, 30 йәш:*** Ҡытайҙарҙа ҡартлыҡҡа ҡағылышлы бик шәп мәҡәл бар. Улар: "Йәш көйө үлергә, ләкин уны нисек тә булһа һуңыраҡҡа ҡалдырырға кәрәк", тиҙәр. Ниндәй тәрән фәлсәфә бар был мәҡәлдә. Мин ошо мәҡәлде күҙ уңында тотоп, ниндәй йәштә лә йәшлек дәртен, аҡыл-зиһен асыҡлығын, күңел көрлөгөн ташламаҫмын, тип өмөтләнәм. Быныӊ өсөн әле үк нигеҙ һалам - спиртлы эсемлектәр эсмәйем, тәмәкенән баш тарттым, спорт менән даими шөғөлләнмәһәм дә, йәйәү күп йөрөйөм, ниндәй ситуацияла ла тыныслыҡ һаҡларға тырышам, үҙемде стрестан һаҡлайым.

Ә ҡартлығымда бер нәмәгә лә мохтаж булмау юлын тәрбиәле, аҡыллы, зиһенле, ихтирамлы, белемле балалар тәрбиәләүҙә күрәм. Бары тик балалар тәрбиәһенә һәм уларҙың белеменә һалынған сығымдар ғына киләсәктә ныҡлы, ышаныслы нигеҙ тәьмин итә. Быны мин үҙемдең миҫалдан сығып та иҫбат итә алам. Беҙ, ғаиләлә үҫкән өс бала, атай-әсәйебеҙҙе бер нәмәгә мохтаж итмәйенсә, бәхетле һәм етеш ҡартлыҡта йәшәү мөмкинлеге биреүебеҙҙе үҙебеҙҙең изге бурысыбыҙ һанайбыҙ. Үҙемдең ҡартлығымды ла яратҡан ҡарсығым менән балалар, ейәндәр ҡамауында бәхетле итеп күрәм һәм уның шундай булыуы өсөн бар көсөмдө, тырышлығымды һаласаҡмын. Киләсәктә балалар тарафынан яратыуға, хөрмәткә һәм ярҙамға дәғүә итеү өсөн үҙеңә әлеге мәлдә лайыҡлы тормош алып барыу мөһим. Балаһына матур, бәхетле, етеш бала саҡ бүләк итеүсе ата-әсә генә үҙенә ҡарата ошондай уҡ мөнәсәбәт көтә ала. Бөгөн бар аҡсаһын эсеп бөтөп, ғаиләһенә көн күрһәтмәй боларған ир-ат ҡартайған көнөндә балаларынан ниндәй мөғәмәлә көтөргә мөмкин? Ни йөҙө менән уларҙан ярҙам өмөт итә ала ул? Шуға күрә егеттәргә уяу булырға, бер минутлыҡ рәхәтлеккә алданып, бәхетле киләсәктәренән баш тартмаҫҡа саҡырам. Барыһы ла үҙебеҙҙең ҡулда.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле башланды. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнен тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**

● Шулай итеп, 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн сентябрҙән **50665** индекслы "Киске Өфө"гә **513 һум 72 тингә** яҙылырға мөмкин. Предприятиелар һәм ойошмалар өсөн билдәләнгән 50673 индекслыһының хаҡы - **543 һум 72 тин**.

● Октябрҙә "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ - **С. Руденконың "Башкиры"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ башҡортса **"Дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныр.



**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға - **252 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **252 һум**.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Президенты Атырау ҡалаһында XI Рәсәй һәм Ҡаҙағстан төбәк-ара хеҙмәттәшлек форумында сығыш яһаны. Углеводород өлкәһендәге инновацияларға бағышланған форум РФ Президенты Владимир Путин менән Ҡаҙағстан Президенты Нурсолтан Назарбаев рәйеслегендә үтте. Нефть һәм газ өлкәһенә заманса технологиялар ҡулланыу мәсьәләләренә арналған форумда Рәсәйҙең һәм Ҡаҙағстандың профилле министрлыҡтары һәм идаралыҡтары етәкселәре, төбәк башлыҡтары, эре бизнес вәкилдәре ҡатнашты. Рөстәм Хәмитов киләһе форумды 2015 йылда Өфөлә үткәрергә тәҡдим итте.

✓ XI Рәсәй һәм Ҡаҙағстан төбәк-ара хеҙмәттәшлек форумы сиктәрендә Башҡортостан Республикаһы менән Ҡаҙағстандың Атырау өлкәһе араһында сауҙа-иҡтисади, ғилми-техник һәм гуманитар өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Был документ иҡтисад, химия һәм нефтехимия сәнәғәте, транспорт һәм ауыл хужалығы йүнәлештәрендә үҙ ара килешеп эшләү бәйләнештәрен нығытыр тип күҙаллана. Бөгөнгө көндә республиканың БДБ илдәре менән тышҡы тауар әйләнешендә Ҡаҙағстан 5-се урында тора. 2013 йылда сауҙа күләме 94,3 млн тәшкил иткән, был сумманың 99 проценты экспортҡа тура килә.

✓ Федерация Советының төбәк палатаһында көҙгө сессияның беренсе ултырышы үтте. Совет рәйесе итеп яңынан Валентина Матвиенко тәғәйенләнде. Рәсәй парламентының юғары палатаһында респубика башҡарма власы мәнфәғәттәрен яҡлаясаҡ Лилиә Ғүмәроваға Федерация Советының Мәғариф, фән һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары вазифаһы тапшырылды. Комитетты Мәскәү дәүләт власы вәкиле Зинаида Драгункина етәкләйәсәк.

✓ 1 октябрҙән көҙгө хәрби саҡырылыш башланды. Республика хәрби комиссариатынан хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостандан Рәсәйҙең Ҡораллы Көстәрендә саҡырыу буйынса хеҙмәт итергә 6600 егет юлланасаҡ. Хеҙмәт итеү ваҡыты элеккесә ҡала - 12 ай. Республиканан саҡырылған егеттәр бөтөн хәрби округтарҙа ла хеҙмәт итәсәк. Яҙғы саҡырылышта бөтәһе 6020 йәш кеше хәрби форма кейҙе.

*КӨНАУАЗ*

# ЙЫРАҠҠА ИЛТКӘН ЮЛ...

## яҡындан башлана




**Йәйге ялдар ҙа тамамланды. Ярты йыл эсендә Украинаға бәйле ҡыялҡы яңылыҡтарҙан бер аҙ биҙрәй төшкән Рәсәй халҡы яңы миҙгелде ҡыҙыҡһынып ҡаршы алды.**

Яңы миҙгел хәбәрҙәре РФ Дәүләт Думаһы депутаттары тирәһендә ҡуйыртылды. Йыл башында ҡабул ителгән ҡарар буйынса 1 сентябрҙән уларҙың эш хаҡы 420 мең һумға тиклем күтәрелеүе, йәки мутлыҡта ғәйепләнгән депутаттар Алексей Митрофанов менән Илья Пономаревтың, тәфтиштән ҡасып, сит илгә сығып тайыуы тураһындағы хәбәрҙәр әллә ни иғтибарҙы йәлеп итмәне шикелле. Ә шулай ҙа был да ҡыҙыҡ бит: элегерәк бөтәһе лә депутат мандатына йәбешеп ята торғайны, әммә һуңғы ике йыл ярым эсендә Дәүләт Думаһының әлеге саҡырылыш депутаттарының 45-е (10 проценты) төрлө сәбәптәр менән үҙ вәкәләттәрен һалыуы аптырарға мәжбүр итә барыбер.

Бына әле ил Хөкүмәте ҡабул иткән санкция - Евросоюз илдәренән һөт продукцияһын һәм ит ризыҡтарын, емеш-еләк индереүҙе тыйған ҡарар буйынса шау-шыу бара. Әммә депутаттар корпусының санкциялар һуғышында ҡатнашыу мөмкинлектәре сикләнгән, сөнки бынан бер нисә йыл элек улар федераль бюджетҡа үҙгәрештәр индереүҙән баш тартып, быны Хөкүмәт вәкәләтлегенә тапшырып ҡуйғайны. Хәҙер Дәүләт Думаһына Хөкүмәттән ебәрелгән ҡарарҙарҙы "хупларға" ғына тороп ҡала. Шулай ҙа ҡайһы бер депутаттар үҙенсәлекле һәм экзотик тәҡдимдәр яңғырата тора. Улар араһында законға "агрессор-дәүләт" төшөнсәһен индереү, ВТО-нан сығыу, халыҡ-ара судтар юрисдикцияһынан баш тартыу, аҙыҡ-түлек хаҡтарына дәүләт көйләүен индереү, Резерв фондындағы аҡсаны Рәсәйгә ҡайтарыу тураһында ҡайғыртыусылар бар. Депутаттар араһында Украинаның атамаһын - Малороссия, Рәсәй субъекттарын губерна менән өйәҙҙәр итеп үҙгәртергә кәрәк, тигәндәре лә булды.

Халыҡ өйрәнгән Ильич лампаларын кире ҡулланылышҡа ҡайтарыу тураһында ла тәҡдимдәр яңғыраны. 2009 йылда ҡабул ителгән РФ Хөкүмәте ҡарары 2011 йылда 100 Вт һәм унан ҡеүәтлерәк лампаларҙы ҡулланыуҙы тулыһынса тыйғайны. 2013 йылдан был тыйыу - 75 Вт, тағы бер йылдан һуң 25 Вт-тан кәмерәк лампаларға ҡағылырға тейеш ине. Улар урынына ҡулланылырға тейешле энергияны һаҡлай торған лампочкалар хаҡы менән генә түгел, сифаты буйынса ла күптәрҙе ҡәнәғәтләндермәне. Шуның өсөн Дәүләт Думаһының энергетика буйынса комитеты элекке лампаларҙы кире ҡайтарыу тураһында һүҙ башланы. Нисек кенә булмаһын, көтөлгән экономияның һиҙелерлек булмауын танынылар. Ә иң үкенеслеһе, Ильич лампаларын энергия һаҡлаусыларына алыштырырға маташыу Рәсәйҙең байтаҡ лампа етештереүсе заводтарын бөлгөнлөккә төшөрҙө.

Йәмәғәт эшмәкәре, "Берҙәм Рәсәй" партияһының Юғары советы бюроһы ағзаһы Александр Шохин да бик "һөҙөмтәле" сара уйлап табыуы менән айырылып торҙо. Торлаҡ-коммуналь түләүҙәре буйынса бурыстары ҙур булған граждандарҙың торлағын электр утынан өҙөргә кәрәк, тине ул. Уларҙы техник яҡтан һыу, газ, канализациянан айырып булмағас, бурыслы ғаиләләрҙең утын һүндереү ҡулайлыраҡ, имеш. Санкциялар һуғышын үҙ граждандарына ҡарата асыу була түгелме был? Халыҡтың ни өсөн түләй алмағанын асыҡламай тороп, был сараны тәҡдим итеү урынһыҙ икәне көн кеүек асыҡ бит. Әйткәндәй, Росстат хәбәр итеүенсә, хәҙер халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы мәлендә һорауҙарға яуап биреүҙән баш тартҡан граждандар өсөн 100-300 һум штраф индереләсәк.

Рәсәй өсөн тағы ла бер мөһим яңылыҡ - донъя баҙарында нефтҡә хаҡ төшә башланы. 3 ай эсендә нефть 15 процентҡа арзанайһа ла, бензинға хаҡтар арта бирә. Тиҙҙән газдың хаҡы төшөүен дә көҙәлләргә була, сөнки хаҡты билдәләү механизмы шулай ҡоролған. Бына былар иһә Рәсәйгә ҡаршы иғлан ителгән санкцияларҙан да ҡурҡынысыраҡ. Нефть менән газ Рәсәй эске тулайым продуктының өстән бер өлөшөн, ә федераль бюджеттың - 48-52 процентын, экспорттың 60 процентын тәшкил итә. 1980 йылдарҙа нефтҡә хаҡтың 4 йыл буйына өс тапҡыр төшөүе Советтар Союзын юҡҡа сығарғанын һаман хәтерләйбеҙ әле. Көнбайыш дәүләттәренең Ираҡ һәм Сүриәлә барлыҡҡа килгән яңы ислам дәүләтенә ҡаршы ойоштора башлаған һуғышына өмөт бағлағандар, был ваҡиғалар Рәсәйҙең хәлен еңеләйтергә тейеш, тиҙәр. Уныһы нисек булыр, ваҡыт күрһәтер.

Украина Президенты Петр Порошенко үҙенең Канадаға беренсе рәсми эш сәфәрендә Оттавалағы украина йәмғиәте вәкилдәре алдында сығыш яһаны. Дәүләт етәксеһе Украинаның Евросоюз менән килешеүен "Советтар Союзы менән иң һуңғы хушлашыу булды", тип иғлан иткәс, дәррәү алҡыштар яңғыраны. Әллә СССР-ҙы шул тиклем яратмағандармы, әллә ҡурҡҡандармы, кем белә инде. Был хәлдән һуң башҡа парадоксаль фекер килә: Рәсәйҙәге санкциялар Украина менән бәйләнмәгән. Рәсәй дәүләтенең көслө булыуын теләмәгән Көнбайыш, иң башта АҠШ, был санкцияларҙы барыбер ҡуллана башлар ине, Украина һылтау ғына булды шикелле. Рәсәйҙе хәлһеҙләндереү өсөн Европаны беҙҙең газдан баш тарттырып, уны АҠШ-тан килгән сланец газына алмаштырыу кәрәк. Икенсе яҡтан, был санкциялар ҡайһылыр яғы менән Рәсәй өсөн дә мөһим. Берҙән, олигархтарҙы "ауыҙлыҡлау", икенсе төрлөсә әйткәндә, "элитаны миллиләштереү" ҙә көнүҙәк мәсьәлә булып тора. Рәсәй Европалағы беҙгә яҡын урынлашҡан Кипр, Болгария, Словакия кеүек дәүләттәр аша Евросоюз индергән санкцияларҙы тотҡарлай ала, әммә нишләптер был аҙымға бармай. Икенсенән, сирек быуат дауам иткән реформалар Рәсәй иҡтисадының структураһын яҡшы яҡҡа үҙгәртмәне. Киреһенсә, ул башлыса сеймал - нефть, газ, металл, ағас һ.б. етештереү "һаҙлығына" батҡандан бата бара. Етештереү сәнәғәте бөтөү өҫтөндә, үҙенең тәбиғи, климат, географик шарттарының киҫкен булыуы арҡаһында беҙҙә әҙер тауар етештереү башҡа дәүләттәргә ҡарағанда ҡиммәтерәккә төшә. Юҡҡа ғына Иосиф Сталинға "тимер шаршау" кәрәк булмағандыр. Был сара дәүләттең иҡтисадын һаҡлау өсөн бик һөҙөмтәле булды. СССР иҡтисади үҫеш буйынса донъяла икенсе урында ине...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Инглиз ғалимы Джон Эштон тикшереүҙәре буйынса, кеше аҙнаһына 3 көн ял итергә тейеш. Оҙаҡ йылдар оптималь эш ваҡытын өйрәнгән ғалим был сара ғаилә мөнәсәбәттәрен яҡшыртырға, стресты кәметергә булышлыҡ итәсәк, тип иҫәпләй. Беҙҙең 5 көнлөк эш аҙнаһы ғаилә, спорт, хобби, сәйәхәт һ.б. менән шөғөлләнергә ваҡыт ҡалдырмай тиерлек. Был торабара стрестарға һәм депрессияға килтерә икән. Иҡтисади яҡтан был бик яҡшы булыр ине лә ул, эшһеҙлек тә байтаҡ кәмер, гастарбайтерҙар ҙа кәрәкмәҫ ине. "Тик" тигән нәмәһе генә бар шул...**

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҠАҒИҘӘЛӘРҘЕ...

## һәр кем үҙгәртә алмай

Һүҙем тағы ла башҡорт телендә дөрөҫ яҙыу-һөйләү ҡағиҙәләренең ҡулланылышы тураһында. Был юлы, мәктәп дәреслектәренән иҫкергән ҡағиҙәләр алып ташланырмы, тигән һорау ҡуям. Был зарурлыҡ күптән тыуҙы бит инде. Донъяла бөтә нәмә, шул иҫәптән тел дә үҙгәрә. Быны үҙ мәлендә тойоп, тейешле саралар күрергә генә кәрәк.

Тик... Уҡытыусы дәрестә, "митинг" һүҙенә ялғау ҡушыр алдынан "ы" өҫтәлә, тип өйрәткәндә, берәй аҡыллы, иғтибарлы уҡыусы: "Апай, гәзиттә улай түгел бит", - тиһә, педагог ни тип яуап бирергә тейеш? Ысынлап та бындай хәлдәр күҙәтелә бит. Ҡағиҙәләрҙе заманға яраҡлаштырып, тәртипкә килтерергә ваҡыт. Яңылыҡтар индереүгә берәү ҙә ҡаршы түгел. Ләкин махсус комиссия тарафынан рәсми рәүештә ҡабул ителмәйенсә тороп, һәр кем үҙ белдеге менән яңы ҡағиҙәләр сығарып, кеше башын бутарға тейеш түгелдер, тип уйлайым. Фәлән кеше фәләнсә яҙғанға ғына грамматиканы үҙгәртеп ебәреү мөмкин булмаған хәл. Тәҡдим итеү - бер эш, әммә уны күпселек ғалимдар ҡабул итәме, юҡмы әле. Шуға тиклем элекке ҡағиҙәләрҙе үтәү мотлаҡ. Юғиһә, хаталы яҙыуҙың бер зыяны ла юҡ, тип нәтижә яһап та ҡуйҙылар. Был тик грамотаһыҙлыҡты аҡлау өсөн генәлер, тигән уй тыуа.

Әйткәндәй, заман йәштәре "-нг" тип тамамланған һүҙҙәрҙе йыш ҡуллана: кастинг, рейтинг, шопинг, кемпинг, лифтинг, мониторинг һ.б. Һүҙлектәр бер-береһен ҡабатлағанлыҡтан, был һүҙҙәр уларға индерелмәгән. Бынан, һүҙлектәрҙе лә, айырыуса орфографик һүҙлектәрҙе, ҡайтанан эшләргә кәрәк, тигән һығымта килеп сыға. Һорауҙар күп. Һөйләшеүҙе дауам итеп, башҡалар ҙа үҙ фекерен белдерһен ине.

**Хәлиҙә АЛТЫНБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда "комендант сәғәте" хәҙер төнгө 12-lә түгел, ә киске 10-да уҡ башланасаҡ. Бындай норма "Башҡортостан Республикаһында бала хоҡуҡтарының төп гарантиялары тураһында"ғы законда билдәләнгән. Уның буйынса, 17 йәше тулмаған балалар төнгө ваҡытта ата-әсәләренән башҡа йәмәғәт урындарында йөрөй алмай. Был нормаларҙы боҙған өсөн 500 һумдан 1000 һумға тиклем административ штраф ҡаралған. Әгәр ҙә бала икенсе тапҡыр был ҡағиҙәләрҙе боҙа икән, штраф күләме 2000 һумға тиклем арта. Октябрҙән апрелгә тиклем - 22 сәғәттән 6 сәғәткә, ә майҙан сентябргә тиклем 24 сәғәттән 6 сәғәткә тиклемге мәл төнгө ваҡыт тип иҫәпләнә.

✓"Лайыҡлы хеҙмәт өсөн" Бөтөн донъя саралар күреү көнө сиктәрендә 7 октябрҙә Өфөлә йәшәүселәр өсөн Профсоюздар йортонда социаль-хеҙмәт һорауҙары буйынса Йәмәғәт ҡабул итеүе үтә. БР Профсоюздар федерацияһы, Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы, Өфө ҡалаһы хакимиәте вәкилдәре хеҙмәт түләүе, мәғариф, балалар һәм үҫмерҙәр ялы, эш менән тәьмин итеү, торлаҡ мәсьәләләре буйынса һорауҙарға яуап бирәсәк. Өҫтәмә мәғлүмәт буйынса 273-53-01, 273-53-17 телефонына шылтыратырға.

✓Республика буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хәбәр итеүенсә, Урал һәм Волга буйы территорияһы буйлап һалҡын арктик һауалы төньяҡ атлантик циклон үтә. Ямғыр, ҡар менән бер рәттән, ул көслө һалҡын ел дә алып килә, урыны менән елдең көсө секундына 17-22 метр тиҙлеккә етәсәк. Һауа температураһының ҡапыл түбәнәйеүе һөҙөмтәһендә сымдарға ҡар һырыуы, юлда боҙлауыҡ барлыҡҡа килеүе ихтимал. Төндә һауа температураһы нолдән түбән булыуы көтөлә.

✓З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә яңы китаптар донъя күрҙе. "Ҡанатлы йөрәк" - шағирә Тәнзилә Дәүләтбирҙинаның алтынсы китабы. Балалар һәм өлкәндәр өсөн берҙәй уңышлы ижад итеүсе Әлфиә Әсәҙуллинаның яңы китабы "Хыял осошо" тип атала. Башҡорт телендәге китаптарҙы нәшриәттең фирма магазиндарында һатып алып була.

**“Башинформ”дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ҮҘЕБЕҘҘЕКЕНӘ ЕТМӘЙ!

**25 сентябрҙә баш ҡаланың Революцион урамы, 70/1 адресы буйынса "Башҡортостан тауары" фирма магазины рәсми асылды. Ундағы аҙыҡ-түлектең 80 проценты - урындағы етештереүсенеке.**

Был эш үҙебеҙҙең етештереүсегә ярҙам һәм халыҡты сифатлы аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү маҡсатынан сығып эшләнә. Быны һатып алыусы үҙе лә баһалай ала: һөт, икмәк, колбаса һәм башҡа аҙыҡ-түлек арзаныраҡ. Белгестәр иһә яҡын-тирә супермаркеттарҙағы хаҡтар менән сағыштырып, һатып алыусыға уңайлыраҡ шарттар тыуҙырырға тырыша. "Башҡортостан тауары" проекты етәксеһе Сергей Зубов әйтеүенсә, һатып алыусы магазинға иғтибар күрһәтһә, артабан бындай сауҙа селтәре киңәйәсәк кенә.

## БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ...

**Йәштәр сәйәсәте буйынса ҡала ведомство-ара комиссияһының сираттағы ултырышында йәйге ялды ойоштороу һәм Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына әҙерлек мәсьәләләре тикшерелде.**

Ведомство-ара комиссия эшмәкәрлеге ҡалала йәштәр сәйәсәтенең көнүҙәк мәсьәләләрен хәл итеүгә ынғай йоғонто яһай. Мәсәлән, тап ошо комиссия ултырышында Өфөнөң йәштәр сәйәсәте өлкәһендә эшләгән белгестәргә айлыҡ өҫтәмә түләүҙәрҙе 2 мең һумға арттырыу мәсьәләһе ыңғай хәл ителгән. Калинин районының Шаҡша биҫтәһендә берҙән-бер бушлай үсмерҙәр клубы асылған. Шулай уҡ йәштәр эшҡыуарлығы буйынса программа эшләү инициативаһы ла тәүҙә комиссия ултырышында күтәрелеп, һуңынан ул Өфө ҡалаһының 2012-2014 йылдарға Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү программаһына индерелгән.

Быйылғы йәйге һауыҡтырыу кампанияһының йомғаҡтары менән ҡала хакимиәтенең Йәштәр сәйәсәте буйынса комитет рәйесе Урал Килсенбаев таныштырҙы. Йәйгеһен 81 профиль лагеры һәм ҡала масштабында 3 лагерь ойошторолған. Уларға 250 бала йәлеп ителгән. Каникул ваҡытында 550 балиғ булмаған бала эшкә урынлаштырылған. Киләһе йылда ҡала йәштәр асыҡ мәғариф форумын уҙғарыу күҙаллана.

2015 йыл Бөйөк Еңеүгә 70 йыл тулыу менән дә әһәмиәтле. Был йәһәттән 2014 - 2015 йылдарға комплекслы план төҙөлгән. Уға ярашлы, быйыл "Үлемһеҙ полк" Дөйөм Рәсәй граждандлыҡ-патриотик акция ойошторолдо, Карелия Республикаһы территорияһында "Урал" отрядының эҙәрмәнлек экспедицияһы үткәрелде. Шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының, тыл хеҙмәткәрҙәренең хәтирәләренән торған архив базаһын булдырыу, һуғышта ҡатнашыусы Өфө кешеләре тураһында берҙәм база булдырыу күҙаллана.

## ГРАМОТАЛЫ ҠАЛА

**Беренсе Бөтә Рәсәй Иң яҡшы муниципаль берәмек сайты конкурсының финалында баш ҡалабыҙ Өфө Рәсәй ҡалалары союзының "Яҡшы инвестицион мөхит булдырған өсөн" һәм "Һөҙөмтәле ҡала төҙәлешө сәйәсәте өсөн" грамоталары менән билдәләнде.**

Донъяла билдәле булған брендтарҙың ҡунаҡханаһын, социаль объекттар, атап әйткәндә, инвестиция күләме 4 миллиард һум тәшкил иткән перинаталь үҙәк төҙөү, торлаҡ төҙәлешенә инвестициялар йәлеп итеү буйынса миллионлы ҡалалар араһында лидерҙар иҫәбендә булыу - былар ошо өлкәләге мөһим күрһәткестәрҙән бер-нисәһе генә. Ҡала тарихында беренсе тапҡыр 100 миллиард һумлыҡ инвестиция йәлеп ителгән. Өфө ҡала хакимиәте тарафынан 2013 - 2018 йылдарға ҡаланы үҫтереүҙең инвестицион стратегияһы, Инвестицион декларация эшләнгән һәм тормошҡа ашырыла. Бигерәк тә муниципаль-шәхси партнерлыҡ нигеҙендәге проекттарҙы үҫтереүгә айырым иғтибар бирелә. Ҡаланың инвестицион ылыҡтырыу һәләте халыҡ-ара һәм Рәсәй кимәлендә юғары баһалана.

Ҡала төҙәлешө сәйәсәтенең һөҙөмтәлелеген һуңғы йылдарҙағы төҙәлеш бумы ла раҫлай. 100 мең кешегә иҫәпләгәндә, баш ҡала Рәсәй буйынса өсөнсө урын алды. Былтыр дөйөм майҙаны 817 мең квадрат метр тәшкил иткән торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған. Был - һуңғы 25 йыл эсендәге иң яҡшы күрһәткес. Социаль программа буйынса былтыр 100 мең квадрат метр торлаҡ тапшырылған. Быйыл был майҙанды тағы ла 10 меңгә арттырыу күҙаллана.

## ИҢ МАТУР ЙОРТ

**Махсус комиссия Башҡортостандың баш ҡалаһындағы "Иң яҡшы шәхси йорт", "Иң яҡшы ихата" һәм "Иң яҡшы урам" смотр-конкурсында ҡатнашыусыларҙың сираттағы дөғүәселәре - Октябрь районының Нуғай һәм Дим районының Романовка ҡасабаларында йәшәүселәр менән танышты.**

"Иң яҡшы шәхси йорт" номинацияһына дәғүә итеүсе, Нуғай ҡасабаһының Төньяҡ урамында йәшәүсе Тәфкәт Зарипов йортон тәбиғәт менән берләшеү мөйөшөнә әйләндергән. Йорт участкаһындағы һәр деталь һәм биҙәү элементы уның тарафынан уйланылған, һәр ағас һәм ҡыуаҡ уның ҡулдары менән ултыртылған. Ғаилә ағзалары йорт хужаһының һәр башланғысын хуплап ҡаршы ала, әммә уның ҡабатланмаҫ иждад процесына ҡыҫылмай. Ә баҡсала гәҙәттәге емеш-еләк ағастарына ғына түгел, йөҙөмгә лә, хатта яһалма күлгә лә урын табылған.

Романовка ауылының Кустарево урамында йәшәүсе, "Иң яҡшы ихата" номинацияһында ҡатнашыусы Ирина Сокольникованың йорт алды участкаһында Альп тауҙарын тере балыҡтар йөҙөп йөрөгән күл тулыландырып тора.

"Иң яҡшы йорт" номинацияһында ҡатнашыу өсөн йорттоң тышҡы йөҙө түбәндәге талаптарға яуап бирергә тейеш: йорттоң биҙәлеш үҙенсәлеге, фасадтың бөхтәлеге, йорт һанының һәм урам атамаһының булыуы. "Иң яҡшы ихата" номинацияһында иһә территорияның төҙөклөгөнә иғтибар бирелә: эскәмйәләр, балалар майҙансығы, ял итеү урындары, йорттоң һәм ихатаның бөхтәлеге, газондарҙың, уларҙың кәртәләренең булыуы, ағастар, сәскәләр, ҡыуаҡтар үҫеүе шарт.

"Иң яҡшы урам" номинацияһында ҡатнашыусыларға иһә шәхси секторҙың бер урамында йәшәүсе бер милексенең йәки бер-нисә кешенең ғариза биреүе кәрәк була. Урамдың төҙөклөгөн тикшергәндә кәртәләрҙең именлеге, йорт һандарының булыуы, йорт алды территорияларының бөхтәлеге, урамдарҙың яҡтыртылыуы, йорт фасадтарының төҙәклөгө, игландар тактаһының булыуы иҫәпкә алына. Еңеүселәр Республика көнөн байрам иткән мәлдәрҙә бүләкләнәсәк.

## ИҢ ЯҠШЫ САЙТ

**Башҡортостандың баш ҡалаһында Иң яҡшы муниципаль берәмек сайты Бөтә Рәсәй конкурсының еңеүселәре бүләкләнде.**

"Берҙәм стилистикала", "Күсеү уңайлылығы", "Интерактивлыҡ", "Халыҡсанлыҡ" (әйткәндәй, был номинацияла Өфө икенсе урын алды), "Контент/Үҫеш һәм перспективалар" номинацияларында Вологда, Ҡаҙан, Омск, Ижау һәм Екатеринбург ҡалалары еңеүсе булды. Ойоштороусы буларак, баш ҡала Мәғлүмәт технологияларын үҫтереү һәм популярлаштырыу өсөн диплом менән бүләкләнде.

Башҡортостан етәкселеге иғлан иткән власть органдары эшмәкәрлегендәге асыҡлыҡ сәйәсәте сиктәрендә, ҡала хакимиәтенең сайты халыҡҡа яҡынайырға тырыша. 2012 йылдан алып ул ҙур үҙгәрештәр кисерҙе. Һөҙөмтәлә был Интернет-ресурсын көн һайын 20 мең самаһы кеше ҡарай. Йылына иһә инеүселәр һаны - ике миллиондан, ә биттәрҙе, материалдарҙы ҡараусылар һаны 6 миллиондан ашып китә. Былар барыһы ла уға 2013, 2014 йылдарҙа Башҡортостандың иң яҡшы сайты исемен яулауға мөмкинлек бирҙе.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ШАМОНИНО АУЫЛЫНДА...

## туған телен һанламағандар йәшәйме?

**Ошо көндәрҙә Өфө районы Шамонино ауылында яңы балалар баҡсаһы асыу мәсьәләһе буйынса йыйылыш үткәрелде. Сараны Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һәм Йәштәр советы ағзалары ойоштороғайны.**



Шамонино ауылында йәшәүселәрҙең 80-90 процентын башҡорттар тәшкил итә. Әммә ауылдағы мәктәптә - башҡорт кластары (быйылғы уҡыу йылынан бер башҡорт класы асылыуы тураһында хәбәр ителгәйне шикелле), балалар баҡсаһында бер генә башҡорт төркөмө лә юҡ. Әле бына икенсе балалар баҡсаһы асырға йыйыналар. Ауылда йәшәүсе ата-әсәләр яңы учреждениены башҡорт балалар баҡсаһы итергә тигән үтенес менән БР Президенты исеменә хат яҙған. Өфө район хакимиәте был телəкте иҫәпкә алып, унда дүрт башҡорт төркөмө асырға ризалығын белдергән. Булып үткән сарала Өфө район хакимиәте башлығы урынбаҫары Люциня Ризуанова: "Әгәр ата-әсәләрҙең ғаризаһы учреждениены тулыһынса башҡорт балалар баҡсаһы итеп асырлыҡ күләмдә булһа, мәсьәлә һис һүҙһеҙ ыңғай хәл ителәсәк", - тип әйтте әйтеүгә. Ләкин... Халыҡ әйтмешләй, һорамаған балаға имсәк ҡаптырмайҙар бит. Мине ошо ауылда йәшәүсе милләттәштәр үҙҙәре, уларҙың битарафлығы аптыратты. Ошо йыйылышта ла улар түгел, ә улар мәнфәғәтен яҡлайбыҙ тип йөрөгән Йәштәр советы ағзалары ғына сығыш яһаны, проблеманы хәл итеү юлдары тураһында тәҡдимдәр әйтте.

Ә Шамонино ата-әсәләре ниндәйҙер сығыш һуңында яңғыраткан ҡул сабыуҙарҙы иҫәпкә алмағанда, өнһеҙ-тынһыҙ ултырҙы. Ни өсөн һеҙ, башҡорттар, балаларығыҙҙы туған теленән мәхрүм итәһегеҙ, тип өндәшке килде уларға. Мостай Кәрим әйтмешләй, "Һинең, ата-әсә, балаңды туған теленән мәхрүм итергә ни хоҡуғың бар?".

Аҙаҡ аралашыуҙан аңлашылыуынса, ата-әсәләрҙең күбеһе балалары башҡорт телендә белем алһа, рус теленән насар белер, тип ҡурҡа, имеш... Ике

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Баш ҡалала йәрминкәләр дауам итә. 4 һәм 5 октябрҙә республиканың ауыл эшсәндәре ҡала халҡына тағы ла йәшелсә, ит һәм һөт ризыҡтары тәҡдим итә. Йәрминкәләр ҡаланың бөтөн райондарында ла эшләйәсәк, мәсәлән, Калинин районында йәшәүселәр өсөн ул - 4, ә Орджоникидзе районында 3 урында урынлашасаҡ. Ленин районының "Пушкин" сауҙа комплексы һәм Совет районының Йәштәр һарайы алдындағы майҙандағы йәрминкә бер генә көн - 4 октябрҙә үтә.

✓Өфөгә республика бюджетынан өҫтәмә саралар бүленеүе сәбәпле, ҡаланың бюджетына үҙгәрештәр индерелде. Ҡала хакимиәтенең финанс идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, уларҙы авария хәлендәге торлаҡ фондынан граждандарҙы күсереү буйынса адреслы программаны өҫтәмә финанслауға, шулай уҡ мәҙәниәт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырыуға, белем биреү усаҡтарында туҡланыуҙы ойоштороуға йүнәлтеләсәк.

✓4-10 октябрҙә Өфө планетарийы үҙенең ярты быуатлыҡ юбилейына һәм Бөтөн донъя космос аҙнаһына арнап, төрлө саралар үткәрәсәк. Шәмбе көнө көндөҙгө 12-се яртыла стратосфера шары осорола. Шарҙың махсус платформаһындағы ҡорамалдар Өфөнө һауанан фотоға һәм видеоға төшөрәсәк. Байрам программаһында викториналар, "Һауа" конкурсына йомғаҡ яһау, космос тураһында фильмдар күрһәтеү, шулай уҡ яҡташыбыҙ, Рәсәйҙән атҡаҙанған летчик-һынаусыһы, СССР-ҙың космонавт-һынаусыһы Урал Солтанов менән осрашыу ҡаралған.

✓5 октябрҙә илдә Уҡытыусылар көнө билдәләнә. Бөгөнгө көндә Өфөнөң белем биреү учреждениеларында 12 меңдән ашыу педагог эшләй. 131 мәктәптә яҡынса 7 мең уҡытыусы балаларға белем бирә. Уларҙың 2 меңдән ашыуы төрлө исемдәргә, 400-ҙән ашыуы Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт наградаларына, маҡтаулы билдәләргә, орден, миҙалдарға лайыҡ.

✓Бөтөн донъя уйындары Халыҡ-ара Ассоциацияһының (IWGA) техник комиссияһы 2021 йылда XI Бөтөн донъя уйындарын Өфөлә үткәреү хоҡуғы биргән ғариза китабына ингән спорт ҡоролмаларын һәм ҡунаҡханаларҙы ҡараны. Ассоциацияның вице-президенты Макс Бишоп белдереүенсә, ҡаланың ғариза китабы бөтөн талаптарға яуап бирә, спорт объекттары билдәләнгән спорт төрҙәрен үткәреү өсөн яраҡлы. Ул Өфөнөң Бөтөн донъя уйындарын үткәреү хоҡуғын яулауҙа мөмкинлеге ҙур, тип баһланы.

✓ *Башҡорт телен белеү миңә инглиз телен, хәҙер иһә төрөк һәм ғәрәп телдәрен өйрәнергә ярҙам итә. Рус телле балаларға был телдәрҙе үҙләштереү ауыр икәне берәүгә лә яңылыҡ түгелдер.*

КӨН ҠАҘАҒЫ



# ХӨКҮМӘТТӘ КЕМДӘР?



**Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәтендә кадрҙар тәғәйенләү тураһындағы бер нисә Указға ҡул ҡуйҙы.**

**Рөстәм Мәрҙәнов** - Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары,
**Евгений Маврин** - Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары,
**Владимир Нагорный** - Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары,
**Салауат Сәғитов** - Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары,
**Илшат Тажетдинов** - Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - республика Хөкүмәте Аппараты етәксеһе,
**Илдар Тимерғәлин** - Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары,
**Альберт Шәйнуров** - Башҡортостан Республикаһының Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле - Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары,
**Дмитрий Шаронов** - Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары,
**Руслан Мирсаяпов** - Башҡортостан Республикаһы министры,
**Сергей Афонин** - Башҡортостандың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры,
**Әнүәр Бакиров** - Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры,
**Евгений Гурьев** - Башҡортостандың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры,
**Әминә Шафиҡова** - Башҡортостандың мәҙәниәт министры,
**Динир Әхмәтйәнов** - Башҡортостандың урман хужалығы министры,
**Андрей Иванюта** - Башҡортостандың йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры,
**Әлфис Ғаязов** - Башҡортостандың мәғариф министры,
**Илдар Һаҙыев** - Башҡортостандың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры,
**Алексей Карпухин** - Башҡортостандың сәнәғәт һәм инновация сәйәсәте министры,
**Николай Коваленко** - Башҡортостандың ауыл хужалығы министры,
**Ленара Иванова** - Башҡортостандың хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры,
**Рида Собханғолова** - Башҡортостан финанс министры,
**Александр Васильев** - Башҡортостандың иҡтисади үсеш министры,
**Наилә Ғәлиева** - Башҡортостандың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты рәйесе,
**Илдар Замалетдинов** - Башҡортостандың торлаҡ һәм төҙөлөш өлкәһендә күҙәтеү буйынса дәүләт комитеты рәйесе,
**Ринат Шәғәлин** - Башҡортостандың Мәғлүмәтләштереү һәм "Асыҡ республика" системаһының эш итеүе мәсьәләләре буйынса дәүләт комитеты рәйесе,
**Вячеслав Ғиләжетдинов** - Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе,
**Сергей Новиков** - Башҡортостандың Дәүләт заказдарын урынлаштыры буйынса дәүләт комитеты рәйесе,
**Хәлит Мәхмүтов** - Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе,
**Ирина Васимирская** - Башҡортостандың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты рәйесе,
**Рөстәм Камалетдинов** - Башҡортостандың Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитеты рәйесе,
**Ильяс Мөниров** - Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе итеп тәғәйенләнде.

Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәтендә кадрҙар тәғәйенләү тураһындағы бойороҡтарға ла ҡул ҡуйҙы.

**Борис Мелкоедов** - Башҡортостандың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе,
**Вәкил Буранбаев** - Башҡортостандың Ветеринария идаралығы начальнигы,
**Илфат Ғәлләмов** - Башҡортостандың Архив эштәре идаралығы начальнигы,
**Әлмирә Ғәниева** - Башҡортостандың Мәғариф өлкәһендәге контроль һәм күҙәтеү идаралығы начальнигы,
**Ринат Ғәлимов** - Башҡортостандың Үҙйөрөшлө машиналарҙың һәм башҡа төр техниканың техник торошон күҙәтеү буйынса дәүләт инспекцияһы начальнигы итеп тәғәйенләнде.

---

телде бутарҙар, имеш... Мәктәптә, аҙаҡ юғары уҡыу йортонда уҡыуы ҡыйын булыр, имеш... Аптыраштан көлөргәме, иларғамы белмәнем...

Мин үҙем ҡалала тыуып-үҫкән бала. Башҡорт балалар баҡсаһына йөрөү бәхете эләкмәне, мин үҫкән саҡта ҡалала улар юҡ ине. 3 йәшкә тиклем тик башҡортса һөйләшкәнмен, балалар баҡсаһына йөрөтә башлағас, бик еңел генә русса ла өйрәнгәнмен. Йәйҙәрен ауылға өләсәйем эргәһенә ҡайтып йөшәгәндә башҡорт телемде тағы камиллаштырғанмын. Шунан атай-әсәйем мине башҡорт гимназияһына уҡырға бирҙе.

Мин башҡорт телемде, туған телемде, ата-әсәм телен, быуындан-быуынға ҡәҙерләп һаҡланған телкәйемде яратам, һаҡлайым. Мине бала саҡтан телле, рухлы иткәндәре өсөн атай-әсәйемә, өләсәйҙәремә рәхмәтлемен. Урыҫ телен дә мин бик яҡшы беләм, хатта урыҫтарҙан бер ҙә кәм һөйләшмәйем, грамматикам да яҡшы, акцентым да юҡ. Ә башҡорт телен белеү миңә инглиз телен, хәҙер иһә төрөк һәм ғәрәп телдәрен өйрәнергә ярҙам итә. Рус телле балаларға был телдәрҙе үҙләштереү ауыр икәне берәүгә лә яңылыҡ түгелдер.

Һуңғы ваҡытта йәштәребеҙ араһында айыҡлыҡ ҡына түгел, ә туған башҡорт телендә һөйләшеү ҙә модаға инде. Бар дуҫтарым да башҡортса аралаша, башҡортса матур саралар үткәрә. Күҙ алдына килтерегеҙ: Шамонино ауылы балалары шундай рухлы башҡорттар араһына барып эләгеп, уларҙың һөйләшен - үҙ туған телен аңламаһа, үҙен кәмһетелгән һымаҡ тояҫаҡ бит. Бына шул ваҡытта бала мотлаҡ ата-әсәһенә үпкәләйәсәк. Беҙ, киреһенсә, барлыҡ ғилемде үҙ телебеҙҙә үҙләштерергә тейешбеҙ, русса түгел, башҡортса фекерләргә тейешбеҙ. Һәм киләсәктә яңы башҡорт интеллигенция ҡатламын булдырыу - беҙҙең маҡсат!

Шуны аңла, башҡорт, һине бер рус кешеһе лә рус милләтле тип танымаясаҡ. Аллаһы Тәғәлә башҡорт итеп яралтҡан икән, башҡортлоҡ - һинең булмышың. Булмышынан ҡасҡан кешенең Ер йөҙөндә бәхет тапҡанын күргән-ишеткән юҡ әле. Уйланығыҙ ошо турала, Шамонино ауылы ата-әсәләре.

**Азалия ДИЛМӨХӘМӘТОВА.**

---

ҺОРАУ - ЯУАП

## МИРАҪ КЕМГӘ ҠАЛА?

**Ирем менән граждандлыҡ никахында йәшәйбеҙ. Ирем үҙенең күсемһеҙ милкен күптән балаларына бүләк иткән. Бергә йәшәй башлағанда уның йәшәр урыны ла, эше лә юҡ ине. Никахыбыҙҙы законлаштырған осраҡта, әгәр ҙә мин алдараҡ вафат булһам, мираҫ нисек бүленәсәк? Күсемһеҙ милкем балаларыма ғына ҡалһын өсөн ни эшләргә? Әлеге ваҡытта уҡ уларға бүләк итеү килешеүе төҙөй алмайым, сөнки улым үҙ өлөшөн шунда уҡ һатасаҡ.**

- Никахығығыҙҙы законлы теркәһәгеҙ, васыятнамә булмаған осраҡта, милек мираҫ буйынса ирегеҙгә, балаларығыҙға, тере булған осраҡта атай-әсәйегеҙгә, ейән-ейәнсәрҙәрегеҙгә (әгәр ҙә балаларығыҙ һеҙҙән алда вафат булһа) күсәсәк. Әгәр ҙә васыятнамә яҙһағыҙ, милек шуға ярашлы ҡараласаҡ. Ләкин ирегеҙгә, һеҙҙең вафатығыҙ ваҡытына 60 йәш тулған булһа йәки ул ғәрип булһа, уға милектән мотлаҡ өлөш сығарыласаҡ.

Бүләк итеү килешеүе төҙәргә хәүефләнһәгеҙ, бөтәһен дә рента килешеүе аша хәл итергә мөмкин. Был саҡта улығыҙ үҙ өлөшөн һеҙ вафат булмайынса һата алмаясаҡ.

## БАҠСАЛАҒЫ ТӘРТИПҺЕҘЛЕК

**Баҡса биләмәһенә инеү урынынан 100 метр арауыҡта, урман ситендә, ҙур сүп-сар өйөмө барлыҡҡа килде. Эҫе көндәрҙә һаҫыҡ еҫтән тын алып та булмай. Кем тәртип урынлаштырырға тейеш?**

- Баҡса биләмәләрендә был һорау менән баҡса идараһы һәм уның рәйесе шөғөлләнә. Улар баҡсасылыҡ берекмәһе исеменән сүп-сар сығарыусы махсус ойошма менән килешеү төҙөй һәм уның үтәлешен тәьмин итә. Шуға күрә мәсьәләне асыҡлау өсөн үҙегеҙҙең баҡса биләмәһе рәйесенә мөрәжәғәт итегеҙ. Был хеҙмәт баҡсасылар аҡсаһынан (взнос) түләнә, шуға күрә һәр баҡсасы сифатлы хеҙмәт күрһәтелеүен талап итергә хоҡуҡлы. Әгәр ҙә ойошма сүп-сарҙы ваҡытында сығармай икән, Роспотребнадзорға һәм прокуратураға дәғүә яҙып, хәлде көйләргә була.

## РУЛЬ АРТЫНДА МИН ТҮГЕЛ ИНЕМ

**Ҡустым минең шәхси еңел автомобилемдә юл фажиғәһенә тарыны. Был осраҡта, руль артында машина хужаһы булмауына һылтанып, страховкалау компанияһы КАСКО буйынса түләүҙән баш тарта аламы? Ҡустым полисҡа теркәлмәгән.**

- Рәсәй Федерацияһының Юғары суды ҡарарына ярашлы, КАСКО полисы һатып алған саҡта автомобиль страховкалана. Шуға күрә юл фажиғәһенә тарыған осраҡта машина руле артында кем ултырыуы мөһим түгел. Страховка компанияһы КАСКО полисына ярашлы барлыҡ түләүҙәрҙе лә башҡарырға бурыслы.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

---

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығыҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Иммунитет нығытыу

Иммунитеттың түбәнәйеүе тураһында һәр инфекцияны йоҡтороп барыу, тиҙ арыу, көндәҙ йоҡо килеү һәм төнөн йоҡлай алмау, тире ауырыуҙары барлыҡҡа килеүе һөйләй. Ҡыш башланмаҫ элек иммунитетты нығытыу күпкә ҡулайлыраҡ.

### Лимон менән йәшелсәләр ҡатнашмаһы

1,5 кг сөгөлдөр, 1,5 кг кишер, 1 кг анар (гранат), 1 кг лимон. Уларҙың барыһының да һутын һығып алғас, 1 кг бал өҫтәргә. Һыуыҡтыҡста һаҡларға. Иртән һәм кисен 1-әр ҡалаҡ ашарға.

### Алоэ-бал-сәтләүек ҡатнашмаһы

100 г алоэ һуты, 4 лимон һуты, ит турағыстан үткәрелгән 1 әфлисун, 300 г бал, 500 г ваҡланған әстерхан сәтләүегеп ҡушып болғатырға. Һыуыҡтыҡта һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 1-әр балғалаҡ ашарға.

### Ете стакан ысулы

1-әр стакан кишер, сөгөлдөр, ҡара торма, нарымһаҡ, лимон һуты, бал һәм кагор алырға. Яҡшы итеп ябып, һыуыҡтыҡста һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң 1-әр ҡалаҡ ашарға.

### Иң тәмле ысул

300 г күрәгә, 300 г йөҙөм, 300 г ҡара емеш, 300 г таҙартылған әстерхан сәтләүеге, 1 лимонды ит турағыстан үткәрергә, 300 г бал ҡушырға. Көн һайын ашарға, күләме сикләнмәгән.

### Имбир ҡатнашмаһы

200 г имбир тамырын таҙартып, ваҡларға, 2 лимонды ҡабығы менән, 100 г инжирҙы, 100 г күрәгәне, 1 стакан мүк еләген шулай уҡ ит турағыстан үткәрергә, болғатырға, 200 г бал өҫтәргә. 1-әр балғалаҡлап ашарға.

### Кишер-бал ҡатнашмаһы

0,5 стакан кишер һуты, 1 балғалаҡ зәйтүн майы йәки ҡаймаҡ, 1 балғалаҡ бал ҡушып, иртәнге аш ваҡытында эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҮЛӘН...

## бар сирҙән дауа

**Башҡорттарҙың дауалау саралары араһында иретелгән эс майҙары ла ҙур урын ала. Эс майы һалҡын тейгәндә ҡулланылған. Ревматизм мәлендә айыу майын эскәндәр, уның менән арҡаны һәм билде ыуғандар. Һарыҡтың оса майы йөрәххәттәрҙе дауалаған, һөйәк сыҡҡанда аҡ май, ҡаҙ майы менән майлап, быуынды урынына ултыртҡандар. Әгәр ҙә тәндә йылҡы майы менән майлаһаң, бер ниндәй ҙә ауырыу ҡағылмаясаҡ, тигән ышаныу булған.**

Бөсөргә тәмәке үләне ҡушылған һарыҡ майы һалғандар. Түңгәүерҙәр ҡорот ҡушылған иретелгән һарыҡ майын эскән. Был май тиҙ туңа. Шуға ла ул эстә туңып, бөсөрҙең йөрөүен туктата, тигәндәр. Был ваҡытта түбәндәгесә һамаҡлана:

*Туң май нисек туңа,*
*Шулай урыныңда ят, бөсөр!*
*Һары бөсөр, аҡ бөсөр,*
*Урыныңда ҡат, бөсөр!*

Баш ауыртыуын бөтөрөү өсөн тауыҡтың эс майын башҡа һалғандар. Эренле яраларға тоҙланған ҡаҙ майына тауыҡтың йомортҡаһын һушып һөрткәндәр, шулай уҡ әсе ҡамыр ҙа ярҙам иткән. Түләмә (Сибирская язва) сирен махсус салынған кәзә бәрәсенең үпкәһе менән дауалағандар. Организм көсһөҙләнгән саҡта һарыҡ, кәзә, тауыҡ һурпаһы файҙалы. Ҡорот йәки ҡатыҡ һалынған һурпа аҙ ҡанлылыҡтан, һалҡын тейгәндән, биҙгәктән ҡотҡара.

Бал - шулай уҡ традицион медицинала киң ҡулланылған сараларҙың береһе. Ул тире ауырыуҙарын, эренле шештәрҙе, стоматит, ангинаны яҡшы дауалай. Һыуға бал болғап эсеү баш ауыртыуын баса, ашҡаҙан-эсәк сирҙәрен, йоҡоһоҙлоҡто дауалай, иммунитетты нығыта.

Үләндәр менән дауаланыу - махсус рәүештә айырым өйрәнелә торған өлкә. Башҡорттар үлән ярҙамында бөтөн ауырыуҙы ла енеп була икәненә ышанған. Сирле кешене артыш, мышар ботаҡтары, мәтрүшкә, ҡайын бөшмәге йәки тилебәрән менән төтәсләгәндәр. Артыш йорттан, аҙбарҙан яуыз көстәрҙе ҡыуып сығара, тип иҫәпләнгән. Сабый балаға күҙ теймәһен өсөн уның маңлайына мышар емеше менән өс тапҡыр түңәрәк һыҙғандар, мышар емешенән муйынсаҡ таҡҡандар. Һарыҡ йәки кәзәләрҙең йөнөнә киптерелгән емештәрҙе таҡҡандар, улар малды һаҡлап торған.

Яҙғы-кышҡы осорҙа авитаминоздан ит-һөт ризыҡтары, яҙ һәм йәй - ашарға яраҡлы үләндәр һәм үҫемлектәр ҡотҡарған. Тәүге йәшел үләнгә шулай уҡ ҙур мәғәнә һалынған. Иртә яҙ һәр кеше иң кәмендә өс тапҡыр - балтырғандан, ҡуҙғалаҡтан, кесерткәндән йәшел аш ашарға, ә май айында ете төр үҫемлек тәмләргә тейеш булған. Әгәр ҙә яҙ 40 баш ҡыр йыуаһы ашаһаң, һалҡын теймәй. Көпшә йыйыны, ҡуҙғалаҡ байрамында тәүге йәшел үҫемлектәрҙән аш әҙерләнгән. "Мин киләмен - ауыҙың ас, мин киләмен, заңге ҡас", тигән һамаҡлауҙы ла, ҡырҙа үҫкән үҫемлектәрҙең файҙалы булыуын да бөгөн дә халыҡ белә.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

**"Салауат" һүҙе ғәрәп телендә "фатиха" тигәнде аңлата икән. Башҡорт халҡына быуаттар аша тамырҙарын онотмай, рухын юғалтмай, тыуған илен ҡурсалап, айырым бер милләт булып һаҡланып ҡалһын өсөн был фатиха Хоҙай тарафынан күптән, 260 йыл элек үк ебәрелгән. Мәңгелеккә милли үҙаңыбыҙ һағында тороусы батыр, башҡорт халҡының бөйөк сардары Салауат Юлаев бөгөн дә изге юлын - кеше күңеленә азатлыҡ, үҙаллылыҡ орлоҡтарын сәсеү, ата-бабаларҙан ҡалған ерҙе яҡлап дауға ҡаршы сығырлыҡ көс биреп, әйҙәүсе булыуын дауам итә. Заманалар үҙгәреп, ҡулға ҡорал алып, яуға күтәрелер саҡтар күптән уҙһа ла, аҡыл туплап, дөйөм ил эҙмышына битараф булмаҫҡа өндәй ул беҙҙе. Милли батырыбыҙ, шағир-импровизаторҙың баҡыйлыҡҡа киткән көнөндә уның иҫтәлегенә арнап үткәрелгән әҙәби флешмоб Салауатты йөрәк түрендә йөрөтәбеҙме, һүҙен күңелебеҙҙә тотабыҙмы икәнлекте тағы бер ҡат тикшерҙе.**

# САЛАУАТТЫҢ ШИҒЫРҘАРЫ...

## доға булып яңғыраны



Өфөләге Салауат майҙанына флешмобта ҡатнашырға теләп, мәктәп уҡыусылары, һөнәрселек училищелары һәм юғары уҡыу йорттары студенттары йыйылды. Телә гән һәр кем ҡушыла алған ирекле сараға миллиондар йәшәгән баш ҡалабыҙҙан ошо тиклем генә халыҡ килеүенә уның эш көнө уртаһында үткәрелеүе ҡамасаулағандыр, күрәһең. Шулай ҙа Салауат Юлаевтың шиғырҙарын майҙанда һөйләүселәр хатта күктәрҙең дә илһөйәрлек, ватансылыҡ, рух күтәренкелеге, халыҡсанлыҡ бөркөп торған шиғри юлдарға һыуһауына шаһит булды, сөнки бер көн алда ғына болоҡһоп, ямғырҙарын яуҙырып торған тәбиғәт ҡапыл аяҙытып, хатта әсетеп тә ебәрҙе. Милли батырыбыҙ һәйкәле алдындағы майҙанда Салауаттың беҙгә тиклем килеп еткән үлемһеҙ шиғырҙары ҡатҡат яттан һөйләнде. Хатта алып барыусылар: "Тағы ла һөйләүселәр юҡмы?" - тип сараның аҙағына яҡынлашыуын белдергәндән һуң да, йәштәр бер-бер артлы түңәрәк эсенә сыға торҙо.

Ул арала Әлшәй районы Раевка мәктәбе уҡыусыһы Азалия Ғәлимуллина: "Бөгөн ошонда баҫып тороуыма бик шатмын! Тәьҫораттар әйтеп аңлатып бөткөһөҙ, таныш шиғырҙар ҙа бында, Салауат Юлаев һәйкәле алдында, икенсе төрлө яңғыраш ала", - тип, кисерештәре менән бүлеште.

Өфөлә үткәрелгән флешмобҡа Башҡортостандың Учалы һәм Салауат райондарындағы, Эстонияның Палдиски ҡалаһындағы милләттәштәр ҙә ҡушылырға тейеш булған икән. Ойоштороусыларҙың береһе, шағирә Лариса Абдуллина әйтеүенсә, учалылар сәсән һүҙле яугирҙың шиғырҙарын яттан һөйләүҙән тыш, уның исеменә арнап ағастар ултыртҡан. "Салауат Юлаевтың тыуыуына 260 йыл тулған йылда уның рухы менән һуғарылып, батырыбыҙҙы иҫкә алып, йәштәргә шиғырҙарын ятлатып, бергә йыйылып алыу маҡсатында ойошторолған сараға уҡалылар бар күңелдәрен һалып әҙерләнгән, иҫ киткес ҙур эш башҡарып, флешмобты юғары кимәлдә үткәргәндәр. Ә беҙҙең бөгөн бында, баш ҡалала, бер микрофон да табырлыҡ хәлебеҙ булманы, - тине Лариса Хашим ҡыҙы. - Шулай ҙа Салауаттың исеме, уның шиғырҙары быуаттар аша барлыҡ тыйыуҙарға, эҙәрлекләүҙәргә ҡарамаҫтан, бөгөнгәсә килеп еткән икән, бындай ғына ҡаршылыҡтарҙы йырып сығырбыҙ, киләсәктә әҙәби флешмобты йыл да үткәрергә мөмкинлек табырбыҙ, тип уйлайым". Тимәк, балаларыбыҙ рухи тәрбиә алмай үҫә, башҡортлоғон онота бара, тип ҡайғырырға түгел, һуңғы йылдарҙа тергеҙелә килгән боронғо башҡорт ғөрөф-ғәҙәттәренә иптәшкә тағы бер заманса йола өҫтәләсәк.

Батырҙың улы ла батыр, тигән борон ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған һүҙҙәр бар. Бөгөн башҡорттар араһында Салауат рухлы ир-уҙамандар бөтмәгән, теләгәндә, улар халыҡҡа үҙ һүҙен әллә ҡайҙа ятҡан Палдиски ҡалаһынан да ишеттерә аласағын белеп, күптәр һөйөндө. Салауат Юлаев майҙанында йыйылыусылар шиғырҙарҙы бөтә тирә-яҡты яңғыратып һөйләй алмаһа ла, батырыбыҙҙан ҡалған аманат һүҙҙәр тик милләтебеҙ ҡолағы ишетерлек итеп уҡыла торған доға кеүек ҡабатланды. Һәр кем Салауаттың шиғри һүҙҙәрен йөрәк түренән үткәрҙе, башҡорт халҡының рухи тотҡаһы, арҡа терәр улы булырҙай милләттәштәр, ил ҡайғыһын ҡайғыртырлыҡ йәштәр батырыбыҙ фатихаһын алып таралды.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

МАТУР ХӘТИРӘ

# ӨЛӘСӘЙЕМ НӘСИХӘТТӘРЕ

**"Бер ир ҡатыны һәм балалары менән сүллек буйлап китеп бара. Юлда эсәр һыуҙары бөтөп, сарсай башлай былар. Бәхеткә күрә, бер емерек йорт янында ҡоҙоҡ күреп ҡалалар. Ир шатланып һыу алырға эйелһә, башына "Был һыу ағыулы түгелме икән?" тигән уй килә. Ул туктап ҡала, ләкин яҡындарын һыуһыҙ ҡалдыра алмай бит инде. Тәүәккәлләп, ҡатыны һәм балаларына һыу эсерә. Үҙе лә эсергә тип эйелһә, иң яҡын кешеләренең үлем менән тартышҡандарын күреп ҡала. Аҡылдан шашып сиккә етеп, ул Хоҙайға ялбара башлай. Хоҙай уға былай ти: "Мин һинең яҡындарыңа ярҙам итә алам. Ләкин һин был хәлдән дөрөҫ һығымта яһарға тейешһең. Миңә яуап бир: кеше ҡылыҡтарының яулап булмай торған иң сиге нимәлә?" Бик оҙаҡ уйлай кеше, яңылышып ҡуймайым, тип ҡурҡа һәм былай ти: "Кеше бөтә ғүмере буйына бик күп кешеләрҙең үлемен күрә, әммә уларҙың хаталарынан һабаҡ алмай һәм үҙен мәңге йәшәйәсәк кеше кеүек тота". Хоҙай ирҙең яуабын ҡабул итә һәм уның яҡындарын терелтә".**

...Кеше ғүмере бишек менән ҡәбер араһы. Тыуыуҙан ҡалмаған, үлемдән дә ҡасыр әмәл юҡ. Тик был хаҡта һирәк уйланабыҙ шул, йыш ҡына онотоп та ебәрәбеҙ. Тормош мәшәҡәттәре баҫа. Фатиры, машинаһы, улары булғас, затлырағы хаҡында хыяллана башлайбыҙ, хаталар яһайбыҙ, ата-бабаларыбыҙҙың "Бер һыуҙы ике тапҡыр кисмәйҙәр" тигән аҡылын онотоп, тағы ла шул уҡ хаталарҙы ҡабатлайбыҙ.

Күп йылдар шулай йөшәлде. Ологая килә, күптән инде гүр эйәһе булған өләсәйем йыш иҫкә төшә. Тауышын да ишетәм төҫлө: "Люциә, Лүзиә, Фәймә, Руза... Эй-й-й, ана китте инде..." Беребеҙгә өндәшер булһа, барыбыҙҙы ла һанап сығыр ине. Иҙелгә ҡомлоҡҡа барһаҡ - Иҙел, яланға сыҡһаҡ - сәхрә, урманға барһаҡ - урман тураһында йырлай, әммә йыр куплеттарының аҙағы мотлаҡ яуҙа үлеп ҡалған ире, үҙенең әсе яҙмышы хаҡында булыр ине. Көйө бер төрлө ("Еҫле гөл" булған ул), һүҙҙәре һәр саҡ төрлө-төрлө. Мин инде ҙур кеше, мәктәптә уҡыйым, йырҙың - өс, күп булһа, дүрт-биш куплеттан торғаны ғына беләм: "Нәнәй, һинең был йырың нисә куплетлы һуң ул, бөтмәй ҙә бөтмәй..." - тим. Эй рәхәтләнеп көлгән була...

Юлда тимер сыбыҡ, шешә ярсыҡтары - кешегә зыян килтерерҙәй әйбер ятһа, ситкә алып ташлар, урғып ятҡан шишмәләрҙе таҙартып китер, беҙҙе лә шуға өйрәтер ине. Һәр осраҡҡа уның тапҡыр һүҙе, әйтем-мәҡәле әҙер. Күмәкләп яҙ көнө баҙҙан картуф сығарып, эреһен-вағын, сәсергә тигәнен айырып ҡуйһаҡ: "Бына, күмәкләгән яу ҡайтарған, эш тә бөттө", - тиер ине оло ҡәнәғәтлек белдереп. Сәстәрем туҙып китеп, һөмһөрөм ҡойолоп, мәсьәлә сисә алмағанда шым ғына

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# БАШҠОРТОСТАНЫБЫҘ...

## Беренсе донъя һуғышы осоронда

**Амбициялар аңды томалағанда, ялған хистәр дөрөҫ ҡарар ҡабул итергә ҡамасаулағанда, бәләкәй генә хата ла ҙур эҙемтәләргә килтереүе мөмкин. Йөҙ йыл элек башланып киткән Бөйөк һуғыш (Икенсе донъя һуғышы башланғансы уны шулай тип йөрөтәләр) шуға миҫал. Ул ваҡытҡа тиклем бер ниндәй аналогы ла булмаған, миллионлаған кешенең ғүмерен өҙгән, дүрт империяның ҡолауына, донъяның сәйәси картаһы ҡырҡа үҙгәреүенә, бәлки, ике тиҫтә ярым йылдан йәнә ҙурыраҡ ҡан ҡойош башланып китеүенә сәбәпсе булған был һуғыш бер быуат үткәс тә ғибрәт һәм фәһем биреп, яңылыш аҙымдарҙан иҫкәртеп тора. Яңыраҡ ҡына ошо тарихи ваҡиғаларға арналған, "1914-1918 йылдарҙағы Беренсе Донъя һуғышы осорондағы Башҡортостан" исемле йыйынтыҡ донъя күрҙе. Йыйынтыҡты төҙөүҙә ҡатнашҡан тарих фәндәре кандидаты, Рәсәй Стратегик тикшеренеүҙәр институтының өлкән хеҙмәткәре Рәмил Насибулла улы РӘХИМОВ ошо һуғыш, Башҡортостандың, Рәсәйҙең уға индергән өлөшө менән таныштыра.**



### Һуғыш алдынан барған сәйәси ваҡиғалар

Беренсе Донъя һуғышының башланып китеү сәбәптәрен тикшергәндә, тәү сиратта донъялағы XIX быуат аҙағы, XX быуат башында барған сәйәси ваҡиғаларға байҡау яһап китергә кәрәк. XIX быуат аҙағында Европала ике ҙур сәйәси блок барлыҡҡа килә. Бер яҡтан - Франция, Бөйөк Британия һәм Рәсәйҙән торған Антанта, икенсе яҡтан - Германия, Австро-Венгрия, Ғосман империяһы берләшкән Тройственный союз. Һәм ошо ике сәйәси блок донъялағы хакимлыҡ өсөн бербереһе менән ярыша башлай. Әлбиттә, тәү сиратта был Англия менән Германияның сәйәси йоғонто өсөн үҙ-ара көрәше була.

Германия бары тик XIX быуат аҙағында ғына Бисмарк ярҙамы менән ҡеүәтле империяға әүерелә. Был ваҡытта донъяла сырье баҙары, колониялар тулыһынса бүленеп бөткән була. Йәш империя иһә армияһына ҙур иғтибар бүлә һәм һуғыштың башланып китеүе өсөн төрлө сәбәптәр эҙләй. Дөрөҫөн әйткәндә, был теләктә Германия яңғыҙ булмай, бар Европа йәмәғәтселегe, шул иҫәптән Бөйөк Британия, Франция һәм башҡа илдәрҙең интеллигенция вәкилдәре ниндәйҙер ҙур сәйәси үҙгәрештәр, донъяның ҡабаттан бүленеүен, һуғыш көтәләр.

Рәсәй императоры Николай II, һуғыш була ҡалһа, Рәсәйҙең уға әҙер булмауын аңлай. Беренсенән, армия менән флотта башланған модернизация тамамланмаған була әле. Шулай уҡ иҡтисади торғонлоҡ масштаблы һуғыш алып барырлыҡ кимәлдә булмай. Ә тимер юлдар системаһының насар үҫеше ғәскәрҙәрҙе бер урындан икенсе урынға күсереү мәсьәләһен ҡатмарлаштыра. Рәсәй императоры һуғыш теләмәй. Ул халыҡ-ара конференцияларҙа, ҙур дәүләттәр ҡоралдарҙан баш тартырға тейеш, тигән тәҡдим менән сығыш яһай, башҡа бер ҡасан да һуғышмаҫҡа саҡыра. Ләкин уның саҡырыуы яуапһыҙ ҡала, дөрөҫөрәге, башҡа дәүләт башлыҡтары был тәҡдим менән риза булмай, шуға ла ҡоралдарҙан баш тартыу идеяһы донъя лидерҙары тарафынан хуплау тапмай.

### Һуғыштың башланып китеүе

1914 йылдың 28 июнендә Балҡанға килгән Австрия эрцгерцогы Франц Фердинандтың серб милләтсеһе Гавриил Принцип тарафынан үлтерелеүе һуғыш башланыуҙың формаль сәбәбе була. Германия был енәйәттә айырым кешене, йәки серб милләтселәре ойошмаһын түгел, ә бар Сербия хөкүмәтен ғәйепләй, Австро-Венгрия ультиматум иғлан итә (әйтергә кәрәк, был кеше ҡараған милләтселәр ойошмаһының Сербия хөкүмәте тарафынан финанслаңыуы бөгөнгө көнгә тиклем иҫбатланмаған). Австрияның ультиматумы Белград өсөн отошһоҙ була, шуға күрә ул быны ҡабул итә алмай. Рәсәй хәлдең ауыр икәнен аңлап, ультиматумды ҡабул итергә саҡырғас ҡына, Белград яуабын үҙгәртә. Ләкин Австро-Венгрия яуапты көтөп тормайынса, Белградты утҡа тота башлай, ғәскәрҙәрен Балҡан иленә индерә.

Рәсәй империяһы, Сербияла хәлдәр киҫкенләшә башлағас уҡ, уның союздашы булараҡ, мобилизация иғлан итә. Германия мобилизацияны туҡтатыуҙы талап итә. Рәсәй императоры рәсми рәүештә хәрби әҙерлектең Германияға ҡаршы йүнәлтелмәүен белдерә. Тыныс шарттарҙа һөйләшеүҙәр үткәреп, енәйәтсене ҡулға алырға һәм яуапҡа тарттырырға тәҡдим итә. Ләкин тыныс юл менән мәсьәләне хәл итеп булмай. Немец илсеһе Пурталес Рәсәйҙең тышҡы эштәр министры Сазоновҡа Берлиндың рәсми талаптары менән мөрәжәғәт итә. Немецтар ике документ әҙерләгән була. Пурталес Сазоновтан өс тапҡыр: "Мобилизацияны туҡтатырға әҙерһегеҙме?"- тип һорай. Өс тапҡыр кире яуап ишеткәс, "Германия Рәсәйгә һуғыш иғлан итә!" тип, ҡулындағы ҡағыҙҙарҙы Сазоновҡа тапшыра. Пурталес үҙе һуғышҡа ҡаршы була, шуғалырмы, әллә тулҡынланыуы арҡаһындамы, ике төрлө яуап яҙылған ике документты ла Рәсәй тышҡы эштәр министрына тапшыра. Был документтарҙан Рәсәйҙең мобилизацияны туҡтатыу, туҡтатмауы бер ниндәй ҙә роль уйнамаясағы, ике осраҡта ла Германия һуғыш иғлан итәсәге асыҡлана.

**(Дауамы бар).**

йөрөр, яуап килеп сыҡһа: "Мына, тырышҡан ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан. Тырышҡас, һабағың да эшләнде", - тип ҡуйыр ине.

"Гел яҡшы уйла, нимә уйлайһың, шул алдыңа килә", тип иҫкәртә торғайны өләсәйем. Иғтибарламағанмын, йәш булғанмын. Тейешле ҡәҙер-хөрмәтте лә күрһәтә алмағанмын. Үҙәкте өҙгәне шул. Иван Сергеевич Тургеневтың "Отцы и дети" әҫәрендә шундай юлдар бар: "Время (дело известное) летит иногда птицей, иногда червяком, но человеку бывает особенно хорошо тогда, когда он даже не замечает - скоро ли, тихо ли оно проходит". Бала сағымдың ошо һиҙелмәй үткән бәхетле минуттары ҡәҙерле өләсәйем менән бәйләнгән. Яңғыҙ ике бала үҫтерергә лә, ауырлыҡтарҙы еңергә лә, ҡибламды дөрөҫ һайларға ла уның нәсихәттәре өйрәтте. Бала сағымды нурлап тороусы ул. Әрләмәй, өшкөрмәй, һиҙҙермәйсә генә әйтем-мәҡәлдәр, тыйыуҙар, әкиәт-хикәйәттәр аша халҡыбыҙҙың ваҡыт һынауын үткән аҫыл йәшәү үрнәктәрен һеңдерә белгән. Ырым-йолаларҙы белеп үҫеүебеҙ үҙебеҙҙе ышаныслыраҡ тойорға, иртәгәгә өмөт менән ҡарарға, ҡыйынлыҡтарҙы еңергә өйрәтте. Үҙе гүр эйәһе инде, әммә яҡшы ғәмәлдәре, өгөт-нәсихәттәре менән һаман эргәмдә генә кеүек. Кешеләргә лә ифрат ярҙамсыл, ихлас, йор һүҙле, шаян булды. Шуға күрә һәр кем уны хөрмәт итте, үҙ итте.

Хәҙер үҙем дүрт тапҡыр өләсәймен, Аллаға шөкөр. Ғәҙәткә кергән өләсәйем һабаҡтарын хәҙер үҙем ейәндәремә бирәм. Уларға әле йәшәргә лә йәшәргә, күп нәмәгә өйрәнергә. Өләсәйемә рәхмәт, ниндәй нәсихәттәр бирергә, нимәгә өйрәтергә икәнен беләм.

**Люциә ЯХИНА.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Башҡорттарҙың ырыуҙарға бүленеше менән таныштыҡ. Халыҡ һаны артыу менән боронғо ырыу өлөшөн тәшкил итеүсе бәләкәй берәмектәрҙең - түбәләрҙең уҙған быуат уртаһында үҙ аллы дачаларға әйләнеүен беләбеҙ. Түбәләр артабан тағы ла вағыраҡ берәмектәргә бүленә - ара, ырыу, аймаҡ, йәмәғәт (ғаилә).

Ырыуға бүленеш XX быуат башында һәр ерҙә тигәндәй һаҡлана. Ырыу үҙ ырыуҙашына туйға ҡалым түләргә ярҙам итә, ҡунаҡтарҙы ҡабул итешә, туйҙы атҡарыша. Күсмә башҡорттарҙың һәр ырыуы үҙ ауылының башҡа ырыуҙарынан айырым урынлаша. Айырым йәмәғәттәрҙән - ғаиләләрҙән торған ырыу ҡасандыр ҙур бер ғаилә булып, бер башлыҡ ҡулы аҫтында берләшкән.

Ҡасандыр айырым ғаилә ағзалары араһында булған бүленеш, туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен асыҡлағанда ҡиммәтле материал булып тора.

| | |
|---|---|
| **атай** *(отец)* | **әсәй, инәй** *(мать)* |
| **олатай** *(дед)* | **оләсәй** *(бабушка)* |
| **ҙуратай** *(прадед)* | **ҙуринәй, ҡартәсәй** *(прабабка)* |
| **ҡартатай** *(предок)* | |
| **бабай, апа, олатай** *(дядя, страший брат отца или матери)* | **әбей, инәй** *(тетка, младшая сестра отца или матери)* |
| **ағай, абзый** *(дядя, младший брат отца или матери)* | **апай, тутай** *(тетка, младшая сестра отца или матери)* |
| **мырҙам, энем, ҡустым** *(младший брат, родной или двоюродный, племянник / сын старшего брата)* | **һеңле, һылыуым, ҡәрендәш** *(младшая сестра, родная или двоюродная, племянница / дочь старшего брата)* |
| **ул, улым** *(сын, племянник / сын младшего брата, внук, мальчик)* | **ҡыҙ, ҡыҙым** *(дочь, племянница / дочь младшего брата, внучка, девушка)* |
| **ир** *(муж, мужчина)* | **бисә, кәләш** *(жена, женщина)* |
| **ҡайнатай, ҡайным** *(тесть, свекор)* | **ҡәйнә, ҡайын инәй, бейем** *(теща, свекровь)* |
| **ҡайнаға, абзый** *(старший брат мужа, жены)* | **ҡайынбикә, бикәс** *(старшая сестра мужа -жены)* |
| **ҡәйнеш, ҡайын энем** *(младший брат мужа, жены)* | **ҡәйен һеңле** *(младшая сестра мужа -жены)* |
| **ейән** *(внук)* | **ейәнсәр** *(внучка)* |
| **бүлә** *(правнук)* | **бүләсәр** *(правнучка)* |
| **тыуа** *(праправнук)* | **тыуасар** *(праправнучка)* |
| **еҙнәй** *(муж старшей сестры, тетки)* | **еңгә** *(жена старшего брата, дяди)* |
| **кейәү** *(муж младшей сестры, тети)* | **килен** *(жена младшего брата)* |
| **ҡоҙа** (сват) | **ҡоҙағый** *(сваха - женщина)* |
| **бажа** (свояк) | **ҡоҙаса** *(сваха - девушка)* |

✓ *Тап ошо осорҙа Елембәт ауылында йәштәр һәм ололар өсөн аръяҡта - ике, бирьяҡта бер футбол майҙаны эшләнек. Өс командаға ла күнекмәләр үткәреү урыны булдырылды. Стадионыбыҙ халыҡ-ара стандарттар буйынса эшләнде.*



# АУЫЛ СПОРТЫН ҮҪТЕРЕҮ...

## тормошҡа ашмаҫ хыял түгел

**Яңыраҡ редакциябыҙға ир уртаһына етһә лә, йәштәрсә етеҙлеген юғалтмаған бер ағай килеп инде. Стәрлебаш районы Елембәт ауылы мәктәбендә оҙаҡ йылдар физкультура уҡытыусыһы булып эшләгән Һиҙиәт ИСМӘҒИЛЕВ атлы уҙаман икән. Һиҙиәт Кәлимулла улы фекер ебен төрлө темалар, донъябыҙҙағы хәл-ваҡиғалар, йәмғиәттә йөрөгән ҡапма-ҡаршылыҡлы фекерҙәр менән бәйләп, кинәйәләп тә, тураһын да ярып һалып, беҙгә бына нимәләр тураһында һөйләне:**



*Хәйер, беҙҙә генә түгел, ул осорҙа күрше 40 йорттан торған Ҡалмаҡ ауылында - бер, һарайсала ике футбол майҙаны, хатта 20 йорттан торған Бүләк ауылында ла волейбол һәм футбол майҙансығы бар ине. Ә беҙҙең 130 йорттан торған ауылыбыҙҙа футбол, волейбол, еңел атлетика, саңғы, көрәш, ат ярышы, велоспорт, мотоуҙышыу яҡшы үҫешкәйне. Бөтөн төрҙәр буйынса ла районда алдынғылар рәтендә булдыҡ. Беҙҙең футбол командаһы 17 тапҡыр район чемпионы булды. Республика ярыштарында ҡатнаштыҡ. Миәкә, Федоровка райондары, Мәләүеҙ ҡалаһы һабантуйҙарын йөрөп сыға инек. 1985 йылда "Содовик" командаһы менән тигеҙ иҫәпкә (3:3) уйнаныҡ. Уларҙың Пименов исемле һаҡсыһы: "Ауылда ла шундай көслө футболсылар тәрбиәләп була икән", - тип, аптырауын йәшермәне.*

### Ынтылыш булһын ине

Ҡыш көнө ауылыбыҙ эргәһенән ағып ятҡан йылға янынан үтеп барышлай бала саҡ эҙҙәремде һағынып ҡарап торғайным. Элек, беҙ бала саҡта, боҙҙо тап-таҡыр итеп ялтыратып, сай-сой килешеп, сәкән һуҡһаҡ, хәҙер боҙҙа уйнаусы, саңғыла йөрөүсе балалар күренмәй. Ниңә шулай һуң? Ниңә балалар спорт менән шөғөлләнеүҙән туҡтаны? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был һорауға бер төрлө генә яуап биреүе лә ауыр. Ошо турала йыш ҡына уйланам. Ғүмер юлым күҙ алдымдан үтеп киткәндәй була. Беҙ ни ғиллә мендәр, сәләмәт булырға тырыша инек, ә хәҙер уландар ауырыуҙарҙы кибеттән "һатып" ала - замана афәтенә әйләнгән әлеге лә баяғы тәмәке, һыра, тағы әллә нимәләр менән мауыға. Ауыл-ҡалаларҙы сәләмәт йәшәү рәүешенә ылыҡтырыу - етәкселәргә, спорт өлкәһендә эшләүсе хеҙмәткәрҙәргә, уларҙың дәртенә, дарманына туранан-тура бәйле түгелме ни? Ниңә ҡайһы бер етәкселәр ошо яуаплылыҡты инҙәренән төшөрҙө? Улай тиһәң, элек бит спортты үҫтереү теләге райком секретарынан түгел, ә "түбәндән" - халыҡтан сыға ине. Шул уҡ беҙҙең Фәрит Булатов, Риф Жданов, Табылды ауылынан Тәлғәт Исмәғилев кеүек физкультура уҡытыусылары спортты үҫтереүгә күп көс һалды.

Спортты ғүмерлек юлдаш иткән беҙҙең тренерҙар - ирле-ҡатынлы Шпиньковтар 90 йәштә лә шәптәр. Әллә бөгөн улар һымаҡ мөкиббән китеп эшләүсе тренерҙар юҡмы? Уйҙарҙан уйылып китерлек, йәмәғәт!

Ошондай тренерҙар ҡанаты аҫтында шөғөлләнгән ваҡытта беҙгә әллә ни ҙур финанс ярҙам да булманы, ә беҙ барыбер уңышҡа өлгәшә инек. Мәҫәлән, йәйге лагерҙа ял иткәндә колхоздан ит алыр өсөн күмәкләшеп бесән саба инек, ләкин "беҙҙә эшкә егәләр" тип, бер кем дә зарланып йөрөмәне. Йыл һайын 35-40 кеше палаткаларҙа йәшәп, шулай сәләмәтлегебеҙҙе ныҡыттыҡ. Совет осоронда балаларҙы хеҙмәт ярҙамында тәрбиәләү ҙә емештәрен биргән, бәлки, хәҙер ҙә ошо ысулды файҙалана башларға кәрәктер? Хеҙмәт тә, спорт та тырышлыҡ талап итә, бала саҡтан эшләргә өйрәнгән кеше үҫкәс тә тырыш була, шулай булғас, алға бара. Минең Ғәлимулла ағайҙы ғына алайыҡ - биш йәшенән бесән сабырға өйрәнгән. Әйҙәгеҙ, ағайым тураһында ентекләберәк һөйләп үтәйем, булмаһа.

### Ололарҙан ҡалышмай бесән сапҡан

Фәриҙә еңгә хәтерләүенсә, бер-нисә кеше, әрҙеүән арбаға ултырып, бесән сабырға китеп бара икән. Ҡапыл араларынан береһе: "Туҡтағыҙ әле, берегеҙҙең салғыһы ҡалмағанмы? Ана, бер малай салғы күтәреп, беҙҙең арттан йүгереп килә", - тигән. Атты туҡтатҡандар ҙа, теге малайҙы көтөп алғандар. Дүрт-биш йәштәр тирәһендәге теге малай минең Ғәлимулла ағайым булған. Килеп етеү менән унан: "Ғәлимулла, ҡайҙа бараһың?" - тип һорағандар. Ә йәш салғысы ыжламай ҙа: "Атайым салғы яһап бирҙе, һеҙҙең менән бесән сабырға ебәрҙе", - тигән. Ултыртып алғандар. Сабынлыҡта бәләкәй Ғәлимулла ла өлкәндәрҙән ҡалышмай бесән сапҡан була ти. Фәриҙә еңгәм: "Туҡтап тор, аҙыраҡ ял ит, арырһың", - тиһә лә, "Юҡ, минә атайым яҡшы итеп сабырға өйрәнеп ҡайтырға ҡушты", - тип яуаплай ҙа, ары сабыуын белә, ти...

Бала саҡтан эш күреп үҫкәнгәме, ағайым ныҡ теремек, етеҙ булды. Һигеҙенсе синыфтан һуң Күмертау физкультура техникумына имтихандар тапшырҙы. Ул имтихан биргәндә бер урынға егерме кеше дәғүә иткән, тиҙәр. Ағай Күмертауҙа Башҡортостанда тәүге дзюдо мәктәбен барлыҡҡа килтергән Антиньян менән бергә уҡыған.

Еңел атлетика буйынса Башҡортостан командаһы өсөн ярышҡан. Алдараҡ телгә алған саңғы буйынса тренер Геннадий Иванович Шпиньков, ағайҙың мөмкинлектәрен күреп алып, уны үҙ күнекмәләренә ҡоҙалай башлаған. Ағай ни сәбәптәндер саңғыны түгел, ә еңел атлетиканы һайлаған, икенсе тренерға барып яҙылған. Уның ҡарауы, йүгереү буйынса ла уныш ҡаҙанған (уның рекордтары тураһындағы мәғлүмәттәрҙе Күмертауҙағы ҡайһы бер тренерҙар дәлилләй ала). Шулай итеп, дүрт уҡыу йылы үтеп тә киткән. Сығарылыш кисәһендә Геннадий Иванович: "Эх, Ғәлимулла туған, минең секцияға йөрөгән булһаң, мин бит һинән саңғы буйынса донъя чемпионы яһаған булыр инем!" - тип әйтеп һалған, тиҙәр. Шпиньковтар мәктәбенә - Күмертау физкультура техникумына - мин ағайымдан күреп уҡырға индем. Ғүмерем буйы Ғәлимулла ағай эҙенән барҙым, тиһәм дә була.

### Спорт - ҡомарлы уйын

Физкультура техникумын тамамлағас, 1975-1976 йылдарҙа Стәрлебаш районы Ҡалҡаш мәктәбендә мәктәп директоры - Ишбулды Ғилман улы Хәсәнов етәкселегендә уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса директор урынбаҫары Радик Үзбәк улы Байназаров (аҙаҡ "Башҡортостан" гәзитендә эшләне), Марс Барый улы Туҡаев ("Ленин юлы" гәзитенең баш мөхәррире булып китте), Нурфәйез Муса улы Баһауетдинов (аҙаҡ РОНО мөдире булды) кеүек аҫыл егеттәр, ағайҙар менән бергә эшләнем. Улар бик шәп саңғысы булды. Үҙем, йәш булыуыма ҡарамаҫтан, ошо ағайҙарҙы үҙ-ара ярыштырып, улар менән бер ҡаҙанда ҡайнап йөрөгән була торғайным. Шул осорҙа бер көн мәктәп директоры Ишбулды Ғилман улы уҡытыусылар кәңәшмәһендә: "Һиҙиәтулла Кәлимулла улы спортты ҡомарлы уйынға әйләндереп бара шикелле ул", - тине. Ҡапылғара аңламай, директор минә ғәйеп ташлай, тип уйланым һәм "Ниңә?" тип урынымдан һикереп торҙом. Директор артабан: "Ул уҡыусылар менән эшләгәндән һуң ауыл йәштәре менән дә төнгө ун-ун икегә тиклем спортзалдан ҡайтмай", - тип маҡтағас, тынысландым. Ишбулды Ғилман улының был һүҙҙәре үҙ эшемә яҡшы баһа икәнен шул мәл генә аңланым.

Мәктәптәге эшемде ваҡытлыса ҡалдырып торҙом: 1976 йылда әрме сафына алындым, ике йыл Ҡаҙағстандың Ҡыҙылурҙа өлкәһе Ленинск ҡалаһында спорт ротаһында хеҙмәт иттем. Унда минә еңел атлетика һәм футбол спорты менән шөғөлләнергә тура килде. Беҙҙең "Орбита" командаһында күберәк офицерҙар уйнай ине. Офицерҙар менән бер командала уйнап, улар менән аралашып, хәрбиҙәр тормошон ныҡыраҡ аңларға тырыштым. Хәйер, лейтенанттарыбыҙ беҙҙән бер-ике йәшкә генә олораҡ егеттәр ине. Бер мәл физик әҙерлек начальнигы майор Тимчук футбол майҙанына һоҡланып ҡарап торҙо ла: "Эх, Исмәғилев, хәрби хеҙмәттән ҡайтырға тура килһә, ауылымдағы стадионды Лужникиҙан яҡшыраҡ эшләр инем", - тип әйтеп ҡуйҙы. Майорҙың ныҡ ҡайтҡыһы килә ине. Хәрбиҙәр - улар ғүмерҙәре буйы ситтә йәшәй, ғүмерҙәре буйы үҙ ерҙәрен һағына. Ә беҙ, хәрби хеҙмәткә ике йылға ғына алынған егеттәр, шундай мәлдәрҙә үҙебеҙҙе күпкә бәхетлерәк тоя инек. 1978 йылда ауылға ҡайттым, ун көн дә үтмәне, мине "К коммунизму" колхозына комсомол секретары һәм спорт буйынса инструктор итеп ҡуйҙылар.

### Ауыл командаһы иң шәбе булды

Тап ошо осорҙа Елембәт ауылында йәштәр һәм ололар өсөн арьяҡта - ике, бирьяҡта бер футбол майҙаны эшләнек. Өс командаға ла күнекмәләр үткәреү урыны булдырылды. Беҙҙең майҙан, майорыбыҙ Тимчук хыялланғанса, Лужники кеүек булды. Техникумдағы "Спорт королмалары" тип исемләнгән дисциплина һабаҡтары бик ярап ҡалды - стадионыбыҙ халыҡ-ара стандарттар буйынса эшләнде. Шул майҙанға көн һайын иртән һәм кис сығып, егеттәр менән күнекмәләр үттек.

Хәйер, беҙҙә генә түгел, ул осорҙа күрше 40 йорттан торған Ҡалмаҡ ауылында - бер, һарайсала ике (беҙ унда ла торбаларҙан ҡапҡалар эшләттек) футбол майҙаны, хатта 20 йорттан торған Бүләк ауылында ла волейбол һәм футбол майҙансығы бар ине. Ә беҙҙең 130 йорттан торған ауылыбыҙҙа футбол, волейбол, еңел атлетика, саңғы, көрәш, ат ярышы, велоспорт, мотоуҙышыу яҡшы үҫешкәйне. Бөтөн төрҙәр буйынса ла районда алдынғылар рәтендә булдыҡ.

Беҙҙең футбол командаһы 17 тапҡыр район чемпионы булды. Республика ярыштарында ҡатнаштыҡ. Миәкә, Федоровка райондары, Мәләүеҙ ҡалаһы һабантуйҙарын йөрөп сыға инек. 1985 йылда "Содовик" командаһы менән тигеҙ иҫәпкә (3:3) уйнаныҡ. Уларҙың Пименов исемле һаҡсыһы: "Ауылда ла шундай көслө футболсылар тәрбиәләп була икән", - тип, аптырауын йәшермәне.

Тәү ҡарашҡа, беҙҙең ауылда спорттың үҫеүендә спортсылар ғына "ғәйепле" һымаҡ. Кемдер, Елембәттә халыҡ үҙе шәп, тип әйтер. Халҡыбыҙ шәплеккә шәп, һүҙ ҙә юҡ, тик халҡыбыҙҙы ойоштороусы, уны кәрәк саҡта илһамландырып тороусы етәкселәрҙең оҫталығы ла иғтибарға лайыҡ. Беҙ, мәҫәлән, колхоз рәйесе Урал Шамил улы Үләевтән уңдыҡ, тип әйтә алабыҙ. Ул үҙе лә "туп йәнле" кеше булды - футбол да, волейбол да уйнай ине. Беҙгә ярҙамы күп тейҙе. Уның ярҙамы менән командаға формалар тектерҙек. Бер тапҡыр Мәләүеҙгә һабантуйға барғайныҡ, беҙҙең формаларҙы күргәс, урындағы егеттәр беҙгә ҡаршы уйнауҙан баш тартты ла ҡуйҙы. Былар бик етди командалар, уйнап, оятҡа ҡалмайыҡ, тигәндәрҙер. Эстәлекте яҡшыртыр өсөн формаға ла етди иғтибар биреү кәрәк шул.

### Мәскәүҙәге Йәйге олимпиадаға барыуым

Беҙҙең колхоз хужалыҡ яғынан һәм спорттан районда алдынғылар рәтендә булды, тип әйтә биреп ҡуйғайным инде. Шуға ла 1980 йылда Мәскәүҙә үтәсәк Бөтә донъя Йәйге олимпиадаға путевка тап минә, колхоздың комсоргы һәм физкуль-

тура буйынса инструкторына эләкте лә инде. Икенсе путевка Ғәлимулла ағайыма бирелде. Башҡортостандан өс төркөм менән юлға сыҡтыҡ. Мәскәүҙә оло сара башланыр алдынан беҙҙе, төрлө төбәктәрҙән йыйылған көйәрмәндәрҙе һәм тамашасыларҙы, бер саҡрым араға йүгертеп ярыштырҙылар. Шул ярышта минә беренсе урын ауларға насип булды. Шунан инде 35 градуслыҡ эҫелә Олимпия уйындарын ҡараныҡ.

Әйткәндәй, былтырғы Сочиҙа үткән Ҡышҡы Олимпия уйындары алдынан Өфөгә "Хоккей көнө"нә ейәндәрем менән килгәнемдә телевидениеға интервью бирергә тура килде. "Рәсәй командаһы нисек сығыш яһар?" тигән һорауға: "Беҙҙекеләр шорт-тректа, фигуралы шыуыуҙа, хоккейҙа көслөләр. Һәр кеше бер мәлдә үҙен иң юғары формаға килтереп еткерә ала. Был ярышта йәш кенә бала ла, Бьерндален кеүек 40 йәшлек спортсы ла еңә ала", - тип яуап биргәйнем. Ысынлап та, әйтеүем раҫ сыҡты - ун биш йәшлек беҙҙең фигурист ҡыҙ Юлия Липницкая ла, Норвегия спортсыһы 40 йәшлек биатлонсы Уле Эйнар Бьерндален да еңеүсе булып танылды.

Ни өсөн уларҙың еңерен алдан белдем? Сөнки мин тренерҙарҙың мөмкинлектәрен дә, кешенең мөмкинлектәрен дә яҡынса самаланым. Һәләтле тренер тәрбиәләнеүсеһенең физик әҙерлеген ниндәйҙер ваҡытҡа ярҡышырта ала. Спортсыларҙың физик торошо һәр саҡ үҙгәреп тороусан: бер мәл ул түбән кимәлдә, ә бер мәл - юғары. Ана шул юғары кимәлгә етеү ваҡытын контролгә ала белһә, тренер спортсыһын еңеүсе итә ала. Әлбиттә, уныш - ул 99 процент тырышлыҡ һәм 1 процент һәләт. Әйтәйек, Бьерндален Сочиға килер алдынан климат буйынса тап килгән Австралияла күнекмәләр үткән, тиҙәр. Беҙ ни күрҙек - әҙерлеге яҡшы булғас, ул бер-нисә еңеү яуланы. Йәки, Франция биатлонсыһы, ике тапҡыр олимпия чемпионы Мартен Фуркад, эшлекелеге, сыныҡҡан булыуы менән аптыратты. Күптәр фиништан һуң көс-хәл менән килеп йығылһа, был егет саңғыһын ысҡындыра ла, йүгерә лә китә ине бит.

Норвегия спортсыһы Бьерндален булһа кәрәк, бер интервьюһында: "Беҙҙең халыҡта һәр кемдең гаражында тимер аты һәм бер пар саңғыһы торорға тейеш, тип ҡарала", - тине. Уйланырға урын бар.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ Һиҙиәт Кәлимулла улы ауылдарҙа күмәк спортты үҫтереү механизмына бер аҙ ишара яһаны. Һәр хәлдә, ул һөйләгәндәрҙән спортты үҫтереү өсөн маҡсатлы рәүештә шөғөлләнгән физкультура укытыусылары ғына ла әллә ниндәй ҙур эштәр атҡара алыуы тураһында белдек. Республикабыҙ райондарында Һиҙиәт Исмәғилев, уның ағаһы Ғәлимулла Исмәғилевтар һымаҡ физкультура укытыусылары бар икәненә иманыбыҙ камил. Уларҙы ла ошо темаға әңгәмәләшергә саҡырабыҙ.**

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - милли көрәште популярлаштырыуға, был спорт төрө буйынса донъя кимәлендәге ярыштар үткәреүгә туранан-тура булышлыҡ итеүсе белгес; республика, Рәсәй, донъя чемпионаттарында еңеүсе уландар тәрбиәләүсе өлгөлө атай; 27 РФ спорт мастеры тәрбиәләгән остаз; бөгөн Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты егеттәре араһынан республика чемпиондары "әүәләүсе" (быйыл Рәсәй ярышында ҡатнашҡан 8 егеттең 7-һе призлы урын алған) тренер Йәлил Динмөхәмәт улы ЙОСОПОВ менән милли көрәшкә ҡағылышлы ҡайһы бер сетерекле проблемалар: уны донъя кимәленә сығарыу, башҡорт йәштәре араһында таратыу, уға башҡа спорт төрҙәре элементтары үтеп инеүҙе булдырмау саралары тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

# МИЛЛИ КӨРӘШ ТРАДИЦИЯЛАРЫН...

## киләһе быуындар ҙа үҙләштерһен, тип

**▸ Иң тәүҙә үҙегеҙҙең тыуған яғығыҙ, һеҙҙе спортҡа илткән тәүге һуҡмаҡтар тураһында һөйләп үтегеҙ әле.**

- Учалы ҡалаһынан 5 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан Иманғол ауылында тыуғанмын, шунда үҫтем. 8 йыллыҡ мәктәптә белем алдым. Спорт уйындары буйынса үткән зона, район ярыштарының барыһында ла мәктәптең йыйылма командаһы составында ҡатнаша инем. Спортҡа бала саҡтан ылыҡтым: айырыуса еңел атлетика күңелгә ятты. 8-се синыфта уҡығанда физкультура уҡытыусыбыҙ беҙҙе тәбиғәткә алып сығып, төрлө спорт уйындары, күнекмәләр үткәргәйне. Мин бер ниндәй күнекмәһеҙ 100 метрҙы 3-сө оololар разряды ваҡытында - 12 секундта йүгереп үттем. Бынан тыш, йүгереп килеп, "кайсы" асыулы менән бер метр ярым бейеккә ырғыным һәм уҡытыусымдың: "Һинә физкультура техникумына барырға кәрәк!" - тигән маҡтауын ишетеп, ҡыуандым. Һикереүҙе, йүгереүҙе бик ярата инем. Ауыл балаһы булғыма, физик эш мул эләккәнгә күрә, спорт элементтары эшләү еңел бирелгәндер, моғайын. Уҡытыусым ҡоҙалаһа ла, мәктәптән һуң физкультура техникумына уҡырға барманым - ауыл мәҙәниәт йортонда художество етәксеһе булып эш башланым. Гармунда, баянда уйнарға ла әүәҫ инем шул.

1969 йылдың июнь айында колхоз һабантуйында көрәшеп ҡарарға булып киттем. Әҙерлегем дә, быға тиклем майҙанда көрәшеп ҡарағаным да юҡ ине. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беренсе урын алдым. Ул замандарҙа ауыл һабантуйҙары яҡшы ойоштороля, гөрләп үтә ине. Еңгән өсөн 49 һумлыҡ ҡара костюм-салбар бирҙеләр. Шәп бүләк булды! Көрәшсе юлы буйлап китеүемә ошо ваҡиға ныҡ тәьҫир итте, тип әйтә алам. Сәм тигәнең ниндәй генә үрҙәргә үрләтмәй ҙә, ниндәй генә һынауҙар алдына ҡуймай! Шул уҡ йылда районда йәштәр көнө үткәйне. Шунда көрәшеп, район һабантуйында беренселекте алған Нуретдинов һәм Зөфәр ағайҙы еңдем. Нуретдин менән Зөфәр ағай - беҙҙең яҡтарҙа киң билдәлелек яулап өлгөргән көрәш батырҙары ине. Уларға бил бирмәүем тағы ла ҡанатландырып ебәрҙе.

**▸ Физкультура уҡытыусылары әҙерләүсе уҡыу йортон тамамламағаһығыҙ ҙа, беҙ һеҙҙе билдәле көрәшсе, абруйлы тренер булараҡ беләбеҙ. Төп һөнәрегеҙ буйынса һеҙ кем һуң?**

- Күптәр минең элекке хоҡуҡ һаҡсыһы булыуым тураһында белмәй. Әйткәндәй, миндә тәрбиәләнеүсе бер бала: "Әгәр үҙегеҙ әйтмәгән булһағыҙ, һеҙҙе элекке милиционер тип уйламаҫһың да", - тигәйне. Органдарҙа эшләгәндә ниндәй булғанмындыр - әйтә алмайым. Әммә ундағы эш алымдарым унда ҡалды. Хәҙер мин тренер.

Әрмәнән ҡайтҡас, Әскә эштәр органдарында 10 йыл эшләгәндән һуң 2 йыл Учалы Картон-рубероид заводында яңғын һүндереү бүлексәһен етәкләнем. Эшкә тәғәйенләнгәс, егеттәрҙе йыйып алдым да, коллективтың физик мөмкинлектәрен яҡшыртыу маҡсатында барыһын да көрәш түңәрәгенә йөрөп йөрөтә башланым. Шулай итеп, аҙнаһына 3 тапҡыр эштән һуң күнекмәләр үткәрә башланым. Көрәшер алдынан йөйен - йүгереп, ҡышын - саңғыла йөрөп киләбеҙ, унан һуң күнекмәләргә тотонабыҙ, тимер-томор күтәрәбеҙ. 1988 йылда Учалы Тау байыҡтырыу комбинатының профсоюздар комитеты рәйесе көрәш тренеры итеп эшкә саҡырҙы. Бында 2006 йылға тиклем эшләнем. Ошо осорҙа 27 РФ спорт мастеры, утыҙлаған Рәсәй ярыштары еңеүсеһе (балалар) һәм чемпионы (оололар), ике Европа һәм бер донъя чемпионы әҙерләнем. Әйткәндәй, призерҙарым да бик күп - республика йыйылма командаһы составында Рәсәй ярыштарында ҡатнашҡан тәрбиәләнеүселәрем бер ҡасан да урынһыҙ ҡайтҡаны булманы. Уның өсөн, нисә призерым барлығын хәтерләй алмайым - 50-60-тан ашыуҙыр, тип уйлайым.

**▸ Учалыланан ҡайһы егеттәрҙе айырым әйтеп китергә теләр инегеҙ?**

- Беҙҙең Учалылағы команданың егеттәре бер-береһе менән бик дуҫ, татыу булдылар, барыһы ла көслө. Уларҙың һәр береһе маҡтауға лайыҡ. Кемделәр айырым әйтеп, ә кемделәр телгә алмай ҡалдырғым килмәй.

**▸ Өфөгә килгәс, һеҙ Башҡортостандағы Көрәш федерацияһында башҡарма директор вазифаһын да үтәгәнһегеҙ. Өфөлә үткән билбау көрәше, милли көрәш буйынса донъя чемпионатын уҙғарыуға ла күп көс түккәнһегеҙ...**

- 2006 йыл Ә. С. Ғайсин Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына тренер итеп эшкә саҡырғас, ғаиләбеҙ менән Өфөгә күсеп килдек. 2008 йылда Өфөлә үтәсәк Көрәш буйынса донъя чемпионатына һайлап алыу Спорт һарайында үтте. Республика командаһын Рәмил Фаяз улы Ҡорбанғәлиев менән беҙ икәү әҙерләнек.

Белеүегеҙсә, хәҙер билбау көрәшен милли көрәштән өҫкә сығарыу күренеше күҙәтелә. Эш шунда: билбау көрәше лә, милли көрәш тә, ҡағиҙәләре төрлө булыуға ҡарамаҫтан, бер Федерацияға инә. Шулай булғас, ике төр буйынса махсуслашҡан спортсылар ҙа берберереһе менән көрәшергә мәжбүр. Билбау көрәшенең ирекле һәм классик стилдәре бар. Ирекләһендә көрәшсе дәғүәсеһен нисек йыҡһа ла ярай. Классик стилдә иһә, рөхсәт ителгән элементтар сикләнгән. Беҙҙең башҡорт көрәшендә нисек? Һин дәғүәсеңде мотлаҡ ерҙән айырырға, унан һуң ғына алып ташларға тейешһең. Был айырманы бөтәһе лә белә, шулай ҙа күптәр әле һаман бутап бер була. Мәскәү тренерҙары беҙҙең милли көрәш ҡағиҙәләрен үҙгәртеп, билбау көрәшенең классик стилен уйлап сығарҙы. Сараһыҙлыҡтан, беҙ классик стиль ҡағиҙәләренә үҙебеҙҙең көрәш элементтарын индерергә тырыштыҡ.

Бынан тыш та ҡаршылыҡтар күп милли көрәш буйынса. Ишеткәнһегеҙҙер, өс йыл элек татарҙар милли көрәште тулыһынса үҙҙәренеке итеп үҙләштереп, "татар көрәше" тип кенә атарға тәҡдим итте. "Татар көрәше"-нең ҡағиҙәләрен, атрибутикаһын булдырҙылар, артабан Мәскәүгә Реестрға индерергә маташтылар. Ярай әле, РФ-ның Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығында был өлкәне белгән кеше ултырған. "Татар көрәше" тигән спорт төрөн реестрға индермәнеләр. Быйыл, ниһайәт, был спорт төрөн рәсми рәүештә "көрәш", русса - "борьба куреш" тип атанылар. Билбау көрәше айырым спорт төрө булып ҡалды.

**▸ Һеҙ әле бик етди проблема күтәрҙегеҙ. Был проблемалар көрәш традицияларын киләһе быуындарға еткереүгә лә бер ни тиклем ҡамасаулайҙыр?**

- Әлбиттә. Билбау көрәше менән шөғөлләнгән спортсы милли көрәш түңәрәгендә шөғөлләнгән спортсы менән бер майҙанға сыҡһа, тәүгеһе икенсеһенен аяҡ салып, этәреп, йә башҡа юл менән еңә. Ул ярыштарҙы ҡарап ултырыусы судьяларҙың да күҙҙәре өйрәнеп бөткән - хәрәмләшеүҙәргә бик үк иғтибар итеп бармайҙар. Билбау көрәшенә йөрөмәйенсә, көрәшкә генә йөрөгән егеттәр дәғүәсеһен күкрәгенә ҡыҫып, атып бәрергә теләй ҙә бит, әммә тегеһе һиҙҙермәй генә аяҡ салып, тороп ҡала. Дәғүәсеһен ташлаған саҡта ҡайһы бер көрәшселәр артҡа атлай. Әммә дәғүәсеһе аяҡ салһа, үҙе артҡа ҡолай ҙа ҡуя. Шуға күрә, ынтылыш һәҙәмтәһеҙ ҡала. Шул арҡала беҙҙең көрәштең бәҫе төшә. Көрәште дөрөҫ кенә итеп сағылдырған элемент - дәғүәсендә күкрәккә ҡыҫып күтәреп, үҙең аша алып ташлау күренеше онотола. Ошо хәл өсөн борсолоп, Билбау көрәше һәм милли көрәш федерацияһы егеттәренә был ике спорт төрөн ике федерация итеп үҙгәртергә кәрәк, тип тәҡдим иткәйнем дә, улар бик үк ҡолаҡ һалманы. Билбау көрәше менән милли көрәш бер федерацияла булғас, милли көрәш буйынса ниндәй генә ярыш үтһә лә, беренсе урындарҙы гел билбау көрәшенә йөрөгән егеттәр ала.

ЙОМҒАҠЛАП...

**Йәлил Динмөхәмәт улы Йосопов бөгөн көрәш ярыштарында була торған ҡыҙыулыҡты һөйләп ишеттерҙе. Тормоштоң ниндәй генә өлкәһен ҡараһаҡ та, конкурентлыҡ, дәғүәләшеү була торғандыр инде. Дәғүәселәрең күп булыуын белеү - алға барыуың бер этәргес лә шул түгелме ни? Бөгөн яңғыраған фекерҙәр башҡорт кешеһенең башҡорт милли спортын ҡайғыртырға тырышыуы сағылышы булараҡ ҡабул ителһен ине.**

**8-9-сы биттәрҙәге материалдарҙы Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**



# Үлемдән ҡасып та...

Байгилде МОТАЛЛАП

(Хикәйә)



Ун һигеҙ саҡрымдағы оло юл сатында ятҡан күрше ауылға, кеше уянып, эшкә ҡыбырлай башлағанда барып етте. Был ауылда бер туған апаһы йәшәй. Тик уға ла бара алмай. Ишеткәндер инде. Гонаһтан йырағыраҡ булыуың хәйерле.

Ҡасандыр бер килгәнендә, ауыл буйҙаҡтары тураһында һүҙ сыҡҡас, апаһы ошо урамдағы өс өйҙә ҡартайып барған ирҙәр яңғыҙ йәшәй, тип, уларҙың ярым емерек торлағын күрһәткәйне.

- Ҡара әле, улым, ошо өйҙә кем йәшәй? - ҙур портфелен саҡ йөкмәп мәктәпкә ашыҡҡан 2-3 синыфтар тирәһендә уҡыған малайға өндәште.

- Кем булһын, алкаш Фирғәт инде, - тине лә, бала юлын дауам итте. Кәбир йорттоң ишеген асты. Насар яғылған өй һалҡын ине. Тауыш-тын юҡ. Тәҙрәнән төшкән ай яҡтыһында һикелә ятҡан ике кәүҙәне шәйләне. Унын хәлендә был бик ҡулай фатир ине. Йайлыраҡ урын ҡараны ла, йоҡларға ятты.

- Һин кем? - яурынына төрткәнгә күҙен асты.

- Төндә ингәйнем, йоҡлап сығырға, - тине, ни әйтергә белмәй.

- Әллә бергә эскәйнекме? - Хужа нимәлер иҫләргә теләгәндәй манлайын сирҙы.

- Юҡ, һеҙ эсеп бөткәйнегеҙ. Бына минен яртым, - Кәбир әмәлен тапты. Кисә юлға алған араҡыны хужаға тотторҙо һәм шунда уҡ уның ҡәҙерле ҡунағына әүерелде.

- Ҡайһылай ҡулай булды, башты нисек төҙәтергә, тип тора инем, - тине лә өҫтәлгә йүнәлде. - Эй, тор, тор, тием, - иптәшен төрткөләп торғоҙҙо.

Кәбир үҙе менән булған ризыҡты ситкәрәк йыйып ятҡайны. Белә, бындай йортта тәғәм ризыҡ булмай.

- Әйҙә, ағай, һин дә яҡынла.

- Юҡ, миңә кәрәкмәй. Үҙегеҙ генә, - Кәбирҙә араҡы ҡайғыһымы инде. Тормоштоң иң түбән баҫҡысына тәгәрәгән ошо кеше аҡтыҡтары ла уға ерҙәге иң бәхетле заттар кеүек хәҙер. Ә ул - шәүлә, убыр.

Күңелләнеп алған ике ир сығып китте. Кәбир тамаҡ ялғаны ла ишек алдына сыҡты. Мунса бар икән.

* * *

- Мунса ҡарап йөрөйһөңмө? - терт итеп ҡалды. Хужа икән.

- Мунса - дан, тик утын юҡ яғырға.

- Аптырама. Ана, ҡойманы емер. Минең дә бер ай йыуынғаным юҡ. Шәп булыр. Һыу, ана, урамда, колонкала.

Кәбир ҡойманы тураҡлап, мунса яҡты, өйҙө лә йылытып ебәрҙе.

Рәхәтләнеп ултырып йыуынды, йылы өйҙә иҙрәп йоҡланы. Иртән, яңы тыуғандай, көр кәйеф менән уянды. Хужа йоҡлай ине әле.

Кәбирҙең был ауылда һабаҡташы йәшәй. Ул ғына ярҙам итер. Вәсилгә китте.

- Эйе, ин. Ишек асыҡ, - ишек шаҡыусыға Вәсил күҙен гәзиттән алмай ғына ҡысҡырҙы.

- Һаумы.

- Ҡаҡшаттығыҙ бит. Тотмайым мин өйҙә ул шайтан һыуын. Йөрөмәгеҙ бында, - ишек төбөндә насар кейенгән, һаҡал баҫҡан кешене күреп, асыуланды йорт хужаһы.

- Вәсил, был мин, Кәбир, - Кәбир ҡыйыуһыҙ ғына тауыш бирҙе.

- Кәбир? Ниндәй Кәбир?

- Һуң, һабаҡташың. Морат ауылынан.

- Кәбир?! - хужа урынын һикереп торҙо. - Кәбир?.. Мораттан?.. Һабаҡташ?.. - Вәсил ҡобараһы осҡан ҡиәфәттә ишек төбөндә торған кешегә яҡынланы.

- Эйе.

- Кәбир! Һине мәрхүм, тип ишеткәйнек тә һуң...

- Юҡ, мин иҫән. Буш хәбәр, - йөҙөнә ҡурҡыу, аптырау, икеләнеү сыҡҡан дуҫына бер аҙым атланы. Вәсил ирекһеҙҙән артҡа сигенде. Алдында торған кеше бигерәк бәҫһеҙ ине: алама кейемдә, һаҡал баҫҡан төҫһөҙ йөҙ, тәрән баткан күҙҙәр.

- Ниндәй елдәр ташланы? - ирекһеҙҙән әйтелде был.

-Үтәйем. Шунан һөйләрмен, - Кәбир бүлмәгә үтте. Йомшаҡ таҙа диванға ултырырға ҡыйманы, ағас ултырғысҡа сүгәләне. Вәсил һүҙһеҙ уға төбәлде. Кәбирҙең ғәжәйеп хикәйәтен ҡымшанмай тыңланы. "Алдында кем: мәйетме, әллә тере йәнме?" - ошо ике һорауға яуап эҙләй ине, шикелле. Ул - элекке уҡытыусы, материалист, дин тотһа ла, баҡыйлыҡҡа ышанып етмәй. Шаңҡыған кеүек ултырҙы ла, иплән кенә үҙен семтеп алды - төшмө был, әллә өнмө. Ауыртыуға һиҫкәнеп китте.

- Нисек тереләй күмгәндәр ул? Табип нимә ҡараған?

- Алтмышты үткәндәрҙе ярмайҙар, тей бит. Ҡартайып үлгән пенсионер кемгә кәрәк. Мәрткә киткән булғанмын, ахыры. Үлгән, тип күмгән дә ҡуйғандар. Дин дә ҡушмай бит мәйетте оҙаҡ көттөрөргә.

- Ғәжәп...

- Ғәжәпләнәһе түгел. Алыҫ бер ҡоҙам ҡалала моргта мәйеттәрҙе телә. Ул бер уйынлы-ысынлы былай тип һөйләгәйне. Мәйет менән булышҡанда эргәлә һәр саҡ ҡыуалды сүкеше тоталар, имеш. Мәрттә булған кеше телеп ебәргән ыңғай иҫенә килә, йәнәһе. Теленгән - эше бөткән. Баяғы ҡыуалды менән маңлайына һуғалар ҙа ҡуялар. Кеше үлгән, нимәһе уның менән мәшәҡәтләнеп торорға. Бәлки, ысынлап та шулайҙыр.

- Сәй ҡуяйым, - Вәсил аш бүлмәһенә сыҡты.

Өҫтәл артында Вәсил дуҫының ҡәҙимге тере кеше булыуына тамам ышанды. Мәйет эҫе сәйҙән тирләмәҫ ине, тип фаразланы.

- Минең серемде һин генә беләһең, нимә эшләргә миңә?

- Әллә инде. Бик сәйер хәл. Әйҙә, тәүҙә һине әҙәм хәленә килтерәйек. Өҫтөндәге аламаны утҡа яғырға кәрәк.

Кейенеп алғас, Кәбиргә кеше ҡиәфәте керҙе.

-Һаҡалың ҡалһын әйҙә, - Вәсил үҙгәрештән ҡәнәғәт булды.

- Артабан нимә эшләйбеҙ?

- Һине кем эҙләй, Кәбир? Милиция! Кешенең шәхесен кем асыҡлай? Милиция! Бәлки, милицияға барырғалыр?

- Уйлап ҡараһаң, шулай инде.

Ике дуҫ бер килке тынып, һәр кем үҙ уйына бирелеп ултырҙы.

- Әбей ҡалаға балаларға киткәйне. Күршегә инеп әйтәйем дә, донъяны байҡап торһондар, районға ҡуҙғалайыҡ, - Вәсил беренсе иҫенә килде. Сыҡты ла, күп тә үтмәй, кире килеп инде.

- Булдымы?

- Булды, әйҙә, киттек, - Вәсил машинаһын тоҡандырғайны. - Күрше әйтә, Моратта мәшһәр, тей. Милиция килеп тулған, хатта Мәскәүҙән дә журналистар бар, имеш. Сенсация, тип яр һалалар икән. Үәт, ҡылғанһын эште дуҫ. Хәҙер һиңә тик милицияға ғына юл. Тотоп алһалар, йолҡҡолап ташларҙар.

Ҡырҡ саҡрым араны тиҙ үттеләр.

- Беҙгә начальник кәрәк ине, - тине дежурға Вәсил.

- Ул яңы ғына райондан ҡайтты. Ҡабул итмәй.

- Бик мөһим эш бит әле, ҡустым, енәйәт тураһында.

- Енәйәт? Улайһа, урынбаҫарға инегеҙ, 105-се бүлмә.

Урынбаҫар эштең нимәлә икәнен төшөнгәс тә, ике ҡартты өҫтөрәтеп начальника индерҙе.

- Иптәш полковник, б-б-был, был, теге, ней, - урынбаҫар тотлоҡто. - Мораттан!

- Еренә еткереп аңлатһаңсы, майор, - начальник бик сәйерһенеп текләне урынбаҫарына.

- Ҡәберҙән сыҡҡан...

- Нимә? - полковник ҡапыл ағарынды. - Кем тотто?

- Үҙҙәре килде.

Кәбир бөтә мажараларын баштан һөйләп бирҙе.

Полковник ауыҙын асып тыңланы. Ниндәйҙер ауыр мәсьәләне сисергә маташыуы йөҙөнә сыҡҡайны. Күрәһең, ҡәберҙән сыҡҡан кеше менән нисек мөғәмәлә итергә тигән һорауға яуап эҙләп яфаланды. Бер законда ла, бер инструкцияла ла был хаҡта әйтелмәгән. Билдәле ҡануниәт сиктәрендә генә эш итергә өйрәнгән кеше өсөн был үтә лә ауыр мәсьәлә ине.

- Майор, граждандар менән ҡабул итеү бүлмәһенә сығып тор әле, - юлын тапты, шикелле. Яңғыҙы ҡалғас, телефонға үрелде. - Алло, Исмәғил Саматович, шәп кенәме? Ярар-ярар, шулай булһын шул. Шылтыратыуымдың сәбәбе шул: теге ҡәберҙән сыҡҡан кеше табылды. Эйе-эйе. Ҡәҙимге. Бер ҙә вурдалакка ла, зомбиға ла оҡшамаған. Һинең менән минең кеүек ҡәҙимге. Ҡайһылай итәйем икән? Енәйәт ҡылмаған ... Документтары юҡ инде. Шәхесен асыҡлағанға тиклемме? Шулай итергә лә мөмкин... Исмәғил Саматович, әллә табиптарға тапшырайыммы икән? Психикаһын тикшерһендәр. Ҡәберҙән сыҡҡан бит. Кем белә, бәлки, зиһене зыян күргәндер? Исмәғил Саматович, килештек. Психушкаға япһындар ҙа, шунда барып күрерһегеҙ был феноменды. Именлектә ҡалайыҡ, - трубканы һалды. Икенсе номерҙы йыйҙы. - Кем әле линияла? Баш табип ҡайҙа? Көтәм. Иҫән, иҫән. Һинең өсөн шәп пациент бар. Психиатрия өлкәһенән. Морат ауылынан. Терелгән мәйет, хи - хи. Төшөндөңмө? Килеп ет. Һиңә тапшырам. Кәрәк кешеләренде ал.

* * *

Кәбирҙең артабанғы яҙмышы ике телефон шылтыратыуы аша хәл ителде. Башҡа ул ирек күрмәне. Хәлһеҙләнеп, алйып, аҡылы зәғифтәр йортонда донъя ҡуйҙы.

Тәүҙә район дауаханаһында тоттолар. Төрлө табиптар килеп тикшерҙе. Шунан республика дауаханаһына күсерҙеләр. Аҡ халатлы олпат-олпат кешеләр палатаһында йыш булды. Төрлө һорауҙар менән яфаланылар, приборҙар менән тикшерҙеләр. Кәбир һәр ваҡыт:

- Мине ҡайтарығыҙ, - тип ялбарып һораны.

- Борсолма, ҡайтырһың. Һаулығың ҡаҡшаған, дауаланырһың да, ҡайтырһың, - тинеләр.

Күпме йылдар үткәндер инде, Кәбир иҫәпте юғалтты. Палатала гел яңғыҙын тоттолар. Тора-бара зиһене ҡаҡшаны, йәшәү ҡеүәһе һүнде. Биргәндәрен ашаны ла, урынында ятты, йә бер нөктәгә текләп тик ултырҙы. Бөтөнләй һөйләшмәй башланы. Хәҙер уның менән ҡыҙыҡһыныусылар ҙа юҡ. Санитарҙар ғына инеп сыға.

Бер көндө аҡ халат кейгән ике кеше пәйҙә булды ишектә. Ҡобаралары осоп, Кәбиргә оҙаҡ текләп торҙолар. Кәбир һиҫкәнеп киткән кеүек булды ла, күҙҙәренән субыр-субыр йәштәр тама башланы. Ирендәре нимәлер шыбырҙаны. Ҡысҡырырға итте, тик тауышы сыҡманы.

- Атай, - оло ғына күренгән ҡатын уның ҡыҙы ине. - Атай, һин тере? - ҡатын быуынһыҙ теҙ сүкте.

- Вәсил, - Кәбир үҙенең тауышына һиҫкәнеп китте. - Ни эшләп мине ташланың? Ни эшләп мине һаттың?..

* * *

Вәсил дуҫын ташламаны, һатманы. Милицияла унан сер һаҡлау тураһында ҡағыҙға ҡултамға ҡуйҙырып, булған хәлде бер кемгә лә һөйләмәҫкә ҡуштылар. Дуҫының именлеге хаҡына шулай кәрәк, тинеләр. Күпмелер ваҡыт үткәс, милицияға тағы барҙы ул. Һин йөрөмә, дуҫыңдың яҙмышы менән өҫтәгеләр шөғөлләнә, тип ҡайтарҙылар. Аптырағас, Вәсил аталарының хәле тураһында уның балаларына хәбәр еткерҙе. Ышанманылар. Аталары тураһында ишеткеләре лә килмәне уларҙың. "Убыр тоҡомо" исемен йөрөтөүе еңел түгел ине. Ауылдаштары Кәбирҙен балаларынан, туғандарынан ситләште - ҡатышманылар, ҡыҙ бирмәнеләр, килен алманылар. Ә ситтәр төпсөнөп ҡаҡшатты. Килеп киткән журналистарҙын иҫәбе-һаны булманы. Хатта сит илдәрҙән дә булғыланылар.

Вәсил дуҫынын эҙенә үҙе төшөп маташҡайны. Район дауаханаһында йылға яҡын тотоуҙарын, шунан баш ҡалаға күсереүҙәрен белде. Өфөгә ике тапҡыр ғына бара алды. Һөҙөмтәһе булманы. Исемһеҙ кешене нисек табаһың. Мөмкин түгел.

Кәбирҙе таба алыуына тамам төңөлгәйне. Бер көндө өйөнә һаҡаллы йәш кешеләр килеп инде. Үҙәк телевидение каналдарының береһендә барған "Ғәләмәт донъя" тапшырыуының журналистары икән. Кәбирҙен балалары, беҙ бер нәмә лә белмәйбеҙ, шул белә, тип, Вәсилгә ебәргәндәр икән.

Бик йылғыр булып сыҡтылар улар. Вәсилден хикәйәтен бер тынала тыңланылыр ҙа: "Вот это удача", - тип сығып та киттеләр. Бер аҙна ла үтмәне, үҙҙәренән хәбәр килде. Кәбирҙе тапҡандар икән, ул ятҡан аҡылы зәғифтәр өсөн дауахананың адресын әйттеләр. "Кемеһен һатып алдыҡ, кемеһен закон менән ҡурҡыттыҡ, кешеһенә ҡарап, кәрәк мәғлүмәтте һығып алдыҡ. Эште бешерҙек", - тинеләр телефон аша.

Дуҫының бинахаҡҡа ғәйепләүенә Вәсил өндәшмәне. Был хәлдә һүҙҙәр мәғәнәһеҙ ине. Кәбир ҙә һорауҙы яуап алыр өсөн бирмәне. Кисергән ғазаптары яңғыраны улар аша.

- Атай, ҡайтайыҡ. Һине алырға килдем, - тине ҡыҙы.

- Ҡыҙым, мин юҡмын бит. Үлгәнмен. Ике тапҡыр үлдем. Минен исемем дә юҡ. Пациент, тип кенә йөрөтәләр, - тине ишетелер-ишетелмәҫ Кәбир.

- Документ эшләтербеҙ. Паспорт алырһың. Пенсия юлларбыҙ...

- Кәрәкмәй, бер нәмә лә кәрәкмәй. Яҙмышым шулайҙыр инде, ҡара ер ҡуйынынан ҡотола алдым, ә алдаҡтан еңелдем. Йылы һүҙ менән әүрәттеләр, ихлас йылмайып, тамуҡҡа тыҡтылар. Ҡәберҙән сыҡмаһам, был ғазаптарҙы кисермәҫ инем. Кисермәҫ инем, - Кәбир, боролоп мөйөшкә текләне лә, һүҙһеҙ ҡалды. Башҡа бер ни өндәшмәне.

**(Аҙағы. Башы 39-сы һанда)**

ИЖАДХАНА

# СӘНҒӘТЕБЕҘ ЙӨҘӨН...

## профессиональ музыка билдәләй



**Унның кеүек үтә лә нәзәкәтле гүзәл заттың ҙур хор менән дирижерлыҡ итеүе бер аҙ сәйер күренеш кеүек. Быны сәбәбе, бәлки, классик музыка донъяһы һәр заманда ла көслө зат батшалығы булып иҫәпләнеүендәлер? Бәлки, дирижерлыҡ һөнәренең төп асылы - көс һәм ҡеүәт булғанлыҡтан, төп асылы көсһөҙлөк булған ҡатын-ҡыҙға унда урын юҡ тигән ҡараш үҙе хаталыр? БР-ҙың Дәүләт академик хор капеллаһының художество етәксеһе һәм төп дирижеры, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының тәрбиә эштәре буйынса проректоры һәм хор дирижерлығы кафедраһы мөдире Алһыу Афған ҡыҙы ХӘСБИУЛЛИНА ошо һәм классик сәнғәткә ҡағылған башҡа һорауҙарға яуап эҙләй.**

### "Аҡ ҡуянҡайҙарҙан тун тектерҙем..."

Әсәйем - Тамара Хәсбиуллина профессиональ йырсы, Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге конкурс лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Атайымдың яғынан да нәҫелебеҙҙә һөнәрен музыка менән бәйләүселәр бар. Илеш районының үҙәгендә, Үрге Йәркәйҙә йәшәгәс, минең музыка мәктәбенә йөрөргә мөмкинлегем булды. Музыка менән шөғөлләнеү дөйөм белем биреү мәктәбендә математик класта уҡырға ла, спорт менән дуҫ булырға ла ҡамасауламаны. Шуға ла минең бала сағым бик ҡыҙыҡлы үтте, тип әйтә алам. Тиҫтерҙәремдән айырмалы рәүештә, мин бары тик бәләкәйҙән әсәйем башҡарыуында башҡорт халыҡ йырҙарын, профессиональ композиторҙарҙың арияларын тыңларға ярата торғайным. Ни өсөндөр "Бейеш"те ҡабат-ҡабат йырлатҡанмын. Мин тыуғансы әле атайым менән әсәйем композитор Шамил Ибраһимов етәкселегендәге үҙешмәкәр хорҙа йырлағандар, шуғалыр ҙа, бәлки, йыр-моң минең өсөн үтә лә таныш мөхит ине.

Өфө сәнғәт училищеһынан һуң академияға уҡырға ингәс, әсәйем дирижерлыҡ йүнәлешен һайларға кәңәш бирҙе. Коллектив менән эшләү һәм ымышара аша үҙеңде асыу минә оҡшай икәнлеген һуңғараҡ аңланым.

### Иң мөһиме - һәләт һәм белем

Ҡатын-ҡыҙ дирижер менән ир-егет дирижер араһында айырма, әлбиттә, бар. Ғөмүмән, башҡорт музыка сәнғәтендә танылыу алған ҡатын-ҡыҙ дирижерҙар байтаҡ, мәҫәлән, Эльвира Ғәйфуллина оҙаҡ йылдар Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының баш хормейстеры булып эшләне. Хор капеллаһында Нәфирә Иҡсанова дирижер була. Дөйөм республика буйынса алып ҡарағанда ла, балалар хорҙары менән тик ҡатын-ҡыҙҙар етәкселек итә. Балалар хорына килгәндә, уларҙа ҡатын-ҡыҙ дирижер булыуы дөрөҫөрәктер, ә профессиональ хор, бәлки, ир-егеттең эшелер, тип тә уйлайым. Әммә был тышҡы яҡтан ҡарағанда ғына шулай тойола. Үҙенең тәбиғи сифаттары менән ҡатын-ҡыҙ хорҙың нескәлектәрен күберәк аңлай ҙа кеүек. Хорҙағы 50 кешенең 50 төрлө холоҡ, уларҙың һәр береһенең иң яҡшы яҡтарын айыра белеп, күңелен дә, һөнәри яҡтан да үҫтерергә бурыслы етәксе кеше. Белемең, тәбиғи һәләтең булһа, бер ҡыйынлығы ла юҡ. Хор капеллаһында шул тиклем юғары интеллигентлы, тәрбиәле кешеләр йыйылған, мин уларҙан иң кәмендә 30 йәшкә кесерәк булһам да, береһе насар һүҙ әйткәне юҡ, ышаныс белдереп, ярҙам итеп кенә торалар.

### Башҡорт музыкаһын танытабыҙ

1970 йылда нигеҙ һалынғанда уҡ БР-ҙың Дәүләт академик хор капеллаһының төп маҡсаты - башҡорт композиторҙарының әҫәрҙәрен пропагандалау, тип билдәләнгән икән, коллектив әле лә был бурысты оло намыҫ менән үтәй. Әҫәрҙәргә ҡытлыҡ юҡ, шөкөр. Ике йыл элек заман башҡорт композиторҙары әҫәрҙәренән торған ҙур концерт эшләгәйнек. Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Рим Хәсәнов, Нур Дауытов, Роза Сәхәүетдинова, Салауат Сәлмәнов, Айһылыу Сәлмәнова һ.б. композиторҙар рәтенә баҫырҙай исемдәр байтаҡ. Сәнғәт академияһының композиция бүлеге студенттарының ижадын да күҙәтеп барам. Араларында техник яҡтан ауыр, ҡатмарлы ғына әҫәрҙәр ижад итеүселәр бар. Башҡорт халыҡ йырҙары һәм көйҙәре буйынса циклдар булдыралар. Халыҡ йырҙарын хор өсөн эшкәртеү йүнәлеше лә айға һалынған. Мәҫәлән, Нур Дауытов эшкәртеүендәге "Буранбай"ҙы бар ерҙә лә ихлас ҡабул итәләр. Һис шикһеҙ, халыҡ йырын эшкәртеү - уны тағы ла юғарыраҡ үргә күтәреү, үҫтереү, тип ҡабул итергә кәрәк. Иң мөһиме, композитор йырҙың тәрәнлеген һәм драматизмын дөрөҫ тоя белһен. Заманға хас яңы техник мөмкинлектәр, заман интонацияларын өҫтәп ебәреү уны байыта ғына. Афарим Аҡсурин "Шәл бәйләнем" йырында, мәҫәлән, джаз яңғырашын да ҡуллана.

Быйылғы ижад миҙгеле хор капеллаһы өсөн юбилей йылы, 45-се миҙгел бик эстәлекле генә булырға оҡшай. Әлеге мәлдә "Волга менән Урал араһында" Бөтөн Рәсәй композиторҙар фестиваленда ҡатнашасаҡ әҫәрҙәргә өйрәнәбеҙ. Хорҙа эшләүҙән тағы бер ҡыҙыҡлы яғы инде ул сит телдә йырҙар башҡарыу. Ҡайһы бер телдәр буйынса белгестәр саҡырып, өйрәнергә була, шулай ҙа дәреслектәр менән генә сит телде үҙләштергән сағыбыҙ ҙа күп.

### Эстрада - юғары сәнғәт түгел әле

Бөгөнгө заман башҡорт музыкаһы хаҡында һүҙ йөрөткәндә, иң тәүҙә профессиональ музыка кимәле тураһында әйтергә кәрәк. Сөнки эстрада бер нисек тә милли профессиональ сәнғәттең күрһәткесе һәм йөҙө була алмай. Был йәһәттән ҡарағанда, профессиональ башҡорт композиторҙарын ситтәр яҡшы беләә, уларҙың әҫәрҙәре күптән донъя сәхнәләрен ялай. Яңы ғына Ләйлә Исмәғилеваның балеты Испанияла күйылды, Нур Дауытовтың әҫәрҙәрен башҡа консерваториялар яратып башҡара. Былар әле ҡапыл иҫкә төшкән исемдәр генә, ә былай бер кемде лә айырып әйткем килмәй, композиторҙарыбыҙҙың һәр береһе иҫ киткес һәләтле шәхестәр.

Ә бына үҙебеҙҙең башҡорт тамашасыһының классик концерттарға йөрөмәүе тураһында һүҙ йөрөткәндә, уныһы бөтөнләй икенсе мәсьәлә. Был беҙҙең, мәҙәниәт кешеләренең, проблемаһы түгел, был дөйөм йәмғиәттең проблемаһы. Мәктәптәрҙә музыка дәрестәрен махсус белгестәр түгел, ә кемдең сәғәте тулмай, шулар уҡытып йөрөгәндә, балаларыбыҙҙың бәләкәйҙән музыка тәрбиәһе алмауына ҡарағанда, хәл әле генә ыңғай яҡҡа үҙгәрмәҫ, үкенескә күрә. Был беҙҙә генә түгел, тотош Рәсәйҙә шундай уҡ хәл. Валерий Гергиев етәкселегендә бөгөн Бөтөн Рәсәй хор йәмғиәте тергеҙелә башланы. Был йәмғиәт тә төп маҡсатыбыҙ - музыка дәрестәренең бәҫен күтәреү икәнлеген таный. Халыҡ хатта табын артында ла йырламай башланы. Әсәйемдәр быуыны матур итеп йырлашып ултыра торғайны, ә хәҙерге йәштәр йырлау тигән нәмәне бөтөнләй белмәй. Икенсе ҡиммәттәр хөкөм һөрә йәмғиәттә.

### Уңыш әүҙемдәрҙе ярата

Дирижер һөнәре һинең тормоштоң бөтөн йүнәлешендә лә әүҙем булыуыңды талап итә. Юғиһә, был яуаплы бурысты атҡарыуы ауыр. Коллективыңды аңлау өсөн улар менән күберәк аралашырға тейешһең, алдына ҡуйған маҡсаттарыңа өлгәшеүҙә лә һүлпәнлек һинең файҙаңа түгел. Ихтыяр көсө тураһында айырым әйтеп тормайым, ул да тап ана шул әүҙемлеккә килтерә лә инде. Нисек бар нәмәгә өлгөрәһең ул, тип аптырағандарға: "Әүҙем булығыҙ, уңыш әүҙемдәрҙе ярата", - тип яуаплайым. Әсәйем үҙе тыйнаҡ кеше булараҡ, мине гел генә сабыр итә бел, тип өйрәтә. Тормошта сабыр була белеү иһә юҡҡа ашҡыныуҙарҙан, күңел кителеүҙәрҙән һаҡлай.

Бер юлы уҡытыусылыҡ эшмәкәрлеген дә алып барыуы ауыр түгел. Практик дирижер булған өсөн минә уҡытыуы енел. Ә инде дирижер булараҡ коллектив менән эшләгәндә уҡытыусы булыуым ярҙам итә. Был ике һөнәр береһен шул тиклем тулыландыра.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Һеҙ ҡатын-ҡыҙҙың ниндәй сифатын юғары баһалайһығыҙ?" тигән һорауға күп кенә бөйөк шәхестәр: "Көсһеҙлектә", - тип яуап биргән, тиҙәр. Һөнәре көслө ихтыярлы булыуҙы талап итһә лә, тормошта барыһы ла Алһыу Хәсбиуллинаны матур холоҡло, нескә күңелле, сибәр гүзәл зат итеп белә. Тимәк, һөнәр кешенең үҙ асылын барыбер ҙә үҙгәртмәйҙер, моғайын. Шулай ҙа, кем әйткән әле, дирижер - ҡатын-ҡыҙ һөнәре түгел, тип?..**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

ЗАУЫҠ



# ӘСӘЙЕМ ҺАБАҠТАРЫ

* * *

Ҡартлыҡ килә үксәләргә баҫып,
Әсәйемде хәҙер аңлайым:
"Йәш ғүмерҙәр ул нисек тә үтә,
Ҡартлығыма бәхет һорайым".

Йәш кешегә бәхет нимә инде?
Бил ауыртмай, аяҡ һыҙламай,
Бөтә эште үҙем эшләй алам,
Бер кемдән дә ярҙам һорамай.

Йәш кешегә бәхет - һаулыҡ түгел,
Бәхет өсөн кәрәк мөхәббәт!
...Ҡартлыҡ килгәс, хатта үҙ балаңа
Баған икән, көтөп мәрхәмәт.

Йылы һүҙгә, яҡты йөҙгә мохтаж
Ҡартлыҡ килә баҫып үксәгә.
Миңә генә түгел, ул һиңә лә,
Һәммәбеҙгә килә. Иртәгә.

Ул иртәгә генә. Ә бөгөнгө
Уй-хыялда бары мөхәббәт.
Йәшлегебеҙ теләй үбеп-ҡосоу,
Ҡартлығыбыҙ һорай мәрхәмәт.

Ҡартлығыбыҙ ҡарай мөйөш аша
Икеләнеп, ҡурҡып, һаҡ ҡына...
Миһырбанлы, зинһар, булайыҡсы,
Килер ҡартлығыбыҙ хаҡына!

* * *

Матур тормош бирҙе беҙгә,
Әсәй, ошо һабаҡҡайың:
"Өй һалырға урын түгел,
Күрше һайла, балаҡайым.

Яҡшы күрше -ярты бәхет,
Ожмах үҙе кәрәк түгел,
Яман күрше - ярты тамуҡ,
Матур йәшәүҙәрҙән төңөл."

Эйе, әсәй, һин ҡушҡанса,
Беҙ ҙә тәүҙә күрше таптыҡ,
Һәр ҡаҙаҡты бергә ҡаҡтыҡ,
Бер телемде бүлеп ҡаптыҡ.

- Был аш етә бөтәбеҙгә!
- Күршем, бөгөн мунса кемдә?
- Һыйырымды һауырһыңмы?
- Балам ҡалып торһон һиндә...

Ғәйеп итмәй ағай-эне:
Туған - йыраҡ, күрше - йәнәш,
Ел ҡапҡанан елеп үтәм
Кәрәк булһа аҡыл, кәңәш.

Эш тә уртаҡ, аш та уртаҡ,
Ярҙамлашып өйҙәр һалдыҡ,
Ситкә өлгә булыр элек
Күршебеҙҙән өлгә алдыҡ.

...Өй һалынды, бала үҫте,
Өлгөрәбеҙ башҡаһына,
Хәҙер инде керешәбеҙ
Эшкә түгел, ашҡа ғына.

Ә шулай ҙа кәрәк булһа
Берәй ергә юлланырға,
Белеп торам: ышаныслы
Күршеләр бар таянырға.

Хоҙайыма шөкөр итәм:
Бигерәк шәп күршеләрем!
Ҡайҙа ғына йөрөһәм дә,
Донъям теүәл, тыныс йәнем.

Кәңәштәрең алтын ҡаҙна,
Һин булғанһың, әсәй, хаҡлы:
"Күршең менән татыу йәшә -
Күрше хаҡы - тәңре хаҡы".

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**

✓ *"Мин яҡшы кешеләрҙең холоҡтарын күреп, ул холоҡтарҙың миндә лә булыуын теләнем, яман кешеләрҙең яманлыҡтарын күреп, был яманлыҡтарҙан йыраҡ торорға тырыштым", тип яуап биргән.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘЙӘҮ ЙӨРӨҮ -

## яҡшы кәйеф сығанағы

■ Саф һауала йөрөү - хәрәкәт, тимәк, ул физик сәләмәтлекте яҡшырта, гиподинамияны булдырмай. Әммә йәйәү йөрөүҙең психик сәләмәтлеккә йоғонтоһо бармы? Бөйөк Британия менән АҠШ ғалимдары мәсьәләнең ошо яғын тикшереп ҡараған. Һынауҙарҙа 3 мең кеше ҡатнашҡан. Улар ике төркөмгә бүленгән, тәүгеһендә йәйәү йөрөргә яратмаусылар тупланған, икенсеһендә Бөйөк Британияның Walking for Health проекты сиктәрендә ойошторолған сәйәхәттәрҙә йөрөүселәр йыйылған. Асыҡланыуынса, икенсе төркөмдәге кешеләр үҙҙәрен күпкә бәхетлерәк тойған, стресс, депрессия уларға ят түгелсә булған. Ғалимдар билдәләүенсә, йәйәүле сәйәхәттәр - кәйефте күтәреүсе иң яҡшы сара. Шуға ла төшөнкө мәлегеҙҙә үҙегеҙҙе өйгә бикләрҙән алда, ошоно иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

■ Күптәр майһыҙландырылған һөт ризыҡтарына өҫтөнлөк бирә. Аҡ майҙа холестерин күп, ғөмүмән, майҙар артыҡ ауырлыҡҡа килтерә, тигәнгә ышанабыҙ. Швед ғалимдары асыҡлауынса, майлы һөт ризыҡтары икенсе типтағы диабет сиренә ҡаршы көрәшә. Канада ғалимдары иһә сырҙың юғары ҡан баҫымын һәм ҡандағы шәкәр кимәлен түбәнәйтеүен билдәләй. Шуға ла сама менән ашағанда, сыр хатта ябығырға ла ярҙам итә.

■ Ҡояш яҡтылығы етешмәһә, йөрәк ауырыуҙары һәм яман шеш барлыҡҡа килеүе ихтимал, ти Кембридж университеты ғалимдары. D витамины етешмәгәндә һөйәктәр ныҡлығын юғалта, диабет, йөрәк сирҙәре киҫкенләшеп китеүе бар. D витамины күп кенә химик реакцияларҙа төп роль уйнай, улар һәҙәмтәһендә кеше организмы үҙен сирҙәрҙән һаҡлай ала. Организмда D витамины етерлек булһын өсөн көнөнә 20 минут ҡояш нурҙары аҫтында йөрөү ҙә етә. Ҡышын аҙнаһына 2-3 тапҡыр балыҡтың майлы сорттарын, шулай уҡ һөт ризыҡтарын ашау был витамин дефицитын түбәнәйтә.

■ Сәстәрҙең иртә салланыуында эш урындағы стрестар һәм башҡа сәбәптәр генә түгел, ә төрлө диеталар һәм итле аҙыҡты аҙ ашау ғәйепле. Сәстең иртә салланыуының иң киң таралған сәбәбе - тирозин аҡһымының етешмәүе. Ул башлыса ит һәм майҙа осрай, шуға ла диетала ултырыусылар һәм ит ашамаусылар был күнелһеҙлеккә йышыраҡ дусар була. Тулы булмаған рационға тирозин һәм баҡыр етешмәй, ә тап улар буяусы пигменттар барлыҡҡа килеүенә яуап бирә.

■ Американың Вирджиния университеты ғалимдары белдереүенсә, баш мейеһенең ҡартайыу процесы бик иртә башлана. Оҙаҡ йылдарға һуҙылған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, мейе әүҙемлегенең иң юғары мәле кеше 22 йәшкә еткәндә була. Эксперттар әйтеүенсә, 27 йәштә мейелә тәүге үҙгәрештәр башлана, ә 37 йәшкә еткәс, хәтер ныҡлап насарая башлай. Ә бына Австралия ғалимдары башваҡкыстар сисеү кеше мейеһендә барған ҡартайыу процесын туктата ала, ти. Өс йыл дауамында 60 йәштән уҙған 70 кешене тикшереп, белгестәр кроссворд яратыусыларҙың Альцгеймер ауырыуы кеүек сирҙәрҙән дә йыраҡ тороуын асыҡлаған. Аҡыл һәләтен һәм әүҙемлеген үҫтермәгән, яңы нәмәләр белергә ынтылмаған кешеләр баш мейеһенең хәтер өсөн яуаплы булған өлөшөнөң 50 процент тирәһен юғалта. Сәйәхәт итеү, сит тел өйрәнеү, шиғыр ятлау ҙа яҡшы һөҙөмтәләр бирә.

МОНОЛОГ

**"Милләткә унын насар вәкилдәрен юҡ итеп түгел, ә яңы быуындарҙы иң яҡшы милли һәм дини традицияларҙа тәрбиәләп хеҙмәт итергә кәрәк. Ошо дин, тарихи үҙаң һәм ғөрөф-ғәҙәттәр һеңдерелгән быуын үҫеп сыҡҡас, дәүләтегеҙҙә элек яуызлыҡ энәләре өҫтөнлөк иткән урында изгелек баҡсалары ҡалҡып сығыр", тип әйткән бер аҡыл эйәһе. Ысынлап та, үҙҙәренең киләсәген уйлаған халыҡтар элек-электән тәрбиәгә ҙур иғтибар бүлгән. Ә заманында көслө ҡәүем булып та ошо мәсьәләлә битарафлыҡ күрһәткән халыҡтарҙың әсе яҙмышы беҙҙең өсөн ғибрәт булып хеҙмәт итергә тейеш. Аллаға шөкөр, беҙ был мәсьәләне күҙ уңынан ысҡындырманыҡ шикелле. Өмөтһөҙ саҡтарҙа ла, һәр ваҡыт нур сығанаҡтары булды. Башҡортостан юлдаш телевидениеһындағы "Йома" тапшырыуы ла ана шул нур сығанағының береһе ул. Сирек быуатҡа яҡын халыҡты рухландырып, уны әҙәпкә, әхлаҡҡа өйрәтеп, Ислам нескәлектәрен, йәшәйеш йүнәлешен күрһәтә килгән, халыҡ тарафынан яратып ҡабул ителгән, "Йома" бөгөн 1000-се тапшырыуын эфирға сығара. Ошо иҫтәлекле ваҡиға уңайынан тапшырыуҙың алып барыусыһы Морат ЛОҠМАНОВ тапшырыу, тормош һәм тәрбиә буйынса тәьҫораттары менән уртаҡлаша.**

# ИМАН НУРЫ ТАРАТА УЛ,

## йәғни "Йома"ның меңенсе тапшырыуы айҡанлы һүҙ



### "Йома"ның аяҡҡа баҫыуы

"Йома"ның сыға башлауы Рәсәй өсөн ҙур яңылыҡ була. Быға тиклем дәүләтебеҙҙә дини темаға арналған теле-, хатта радиотапшырыуҙар булмай тиерлек. Дини тапшырыуҙар булыуы мөмкин, тигән уй ҙа ҡырағыраҡ тойола ул заманда. Ләкин айырым кешеләрҙең ҡыйыулығы, тәүәккәллеге, дин эшмәкәрҙәренең кәрәкле ваҡытта, кәрәкле урында әйтелгән һүҙҙәре һуңғы роль уйнамай ҡалмай: "зәңгәр экран"дарҙа башҡорт телендә дини тапшырыу сыға башлай.

Рөхсәт алынды, барлыҡ формаль мәсьәләләр хәл ителде, эштең күп өлөшө урынына еткерелде, тигән саҡта ғына йәнә бер мөһим мәсьәлә килеп баҫа: был тапшырыуҙы кем алып барыр? Алып барыусы тапшырыуҙың тотҡаһы булырға тейешлеген барыһы ла аңлай. Тәүҙә Шәүрә апай Ғилманова әҙерләй уны. Бер нисә тапшырыуҙан һуң, "Йома"ны ҡатынҡыҙ алып барырға тейеш түгел, тигән фекер яңғырай башлай. Быны менән бөтәһе лә ризалаша. Шунан тапшырыу тотҡаһын Йәркәй хажи Яҡшыдәүләтовҡа тапшыралар. Ул осорҙа Йәркәй ағай оҫта һүҙле, абруйлы хәбәрселәрҙең береһе итеп таныта үҙен. Эш башлаған сағында Йәркәй ағай дин әһелдәренә һәм үҙенең күнелендә йөрөткән дини тәрбиәгә таяна, тик үҙенең дини белеме етенкерәмәй. Ләкин дин әһелдәре менән аралашааралаша торғас, ул тейешле ғилемде үҙләштереүгә өлгәшә. "Йома" бөтә халыҡ мөкиббән ҡараған тапшырыуға, рухландырыусы, халыҡты дингә әйҙәүсе ҙур көскә әйләнә. Беҙҙең быуын унын тапшырыуҙарында үҫте. Мин үҙем дә үсмер ваҡыттарҙа уҡ бер тапшырыуҙы ла ҡалдырмай яратып ҡарап бара торғайным. Аллаһы Тәғәлә алдан уҡ ошо юлды иҫкәртеп ҡуйғандыр миңә лә.

### Тапшырыуҙың алып барыусыһы булып эшләй башлауым

Ул ваҡытта Шишмә районында мәктәптә һәм мәсеттә эшләп йөрөй инем. Бер ваҡыт ауылдың имамы Мәүлетдин хәҙрәт "Йома" тапшырыуына алып барыусы эҙләйҙәр, барып ҡарамайһыңмы?" тип өндәште. Тәҡдим көтөлмәгәнерәк булды, был тапшырыуҙы даими ҡарап барһам да, унын алып барыусыһы булырмын тип бөтөнләй уйламай инем. Шулай итеп, тәҡдир ҡушыуы буйынса, "Йома"ға килеп эләктем.

Эйе, дини тапшырыуҙы алып барыу оло бер яуаплылыҡ. Алға китеп халыҡ аңламаған нәмәләр тураһында һөйләргә, шулай уҡ замандан артта ҡалырға ла ярамай. Халыҡтың ихтыяжын тойоп, уның кимәлен ҡарап, мәсеттәрҙә генә түгел, ҡалаларҙа, райондарҙа кешеләр менән осрашып, уларҙың күнел торошон һиҙеп, юл күрһәтеп барыу тейешле булды беҙгә. Шуға ла "Йома"ны алып барыу башҡа тапшырыуҙарҙы алып барыуға ҡарағанда ауырыраҡ, тип уйлайым. Сөнки дин мәсьәләләрендә бәләкәй генә хата эшләргә, яңылыш бер һүҙ әйтергә лә ярамай. Насар табип кеше үлтерә, ғилемһеҙ имам диндән сығара, тигән мәҡәл бар. Ғилемһеҙ имам үҙе генә түгел, үҙе артынан халыҡты, бер нисә быуын вәкилен диндән сығарыуы ихтимал. Шуға күрә быңдай яуаплылыҡты тойоп, бик күп уҡырға, бик күп сағыштырырға, ғилемде тәрәнәйтеп, камиллаштырып торорға кәрәк булды.

Икенсе яҡтан, был күнел эше. Күңел биреп эшләгән эштә арыу-талыу тигән нәмә юҡ. Эш буйынса бик ҡыҙыҡлы кешеләр менән осрашабыҙ, бик фәһемле һүҙҙәр ишетәбеҙ. Ябай ғына күренгән кешеләрҙән дә оло хикмәт алырға була. Бер саҡ Лоҡман Хакимдан "Һин ҡайҙан дөрөҫлөктө таба белдең?" тип һорағандар. Ул: "Мин яҡшы кешеләрҙең холоҡтарын күреп, ул холоҡтарҙың миндә лә булыуын теләнем, яман кешеләрҙең яманлыҡтарын күреп, был яманлыҡтарҙан йыраҡ торорға тырыштым", тип яуап биргән. Шуның шикелле, тапшырыуҙар әҙерләгәндә төрлө ынғай дини эшмәкәрлекте күреп, уларҙы башҡа ерҙәрҙә лә таратырға көс һалабыҙ, кемдер дөрөҫ уҡ булмаған юлды һайлаған икән, уға нәсихәт бирәбеҙ, тура юлды табырға ярҙам итәбеҙ.

Ислам динен матур итеп күрһәтеү, кешеләрҙә эйәртә алыу мөһим мәсьәлә, был эштә зирәклек кәрәк. Беҙҙең аудитория төрлө йәштә, шуға ла йәш айырмаһын да күҙ уңында тоторға тырышабыҙ. Мәҫәлән, ололарға доғалар, йәки шуның шикелле Аллаһы Тәғәлә менән мөнәсәбәттәр хаҡында бәйән иткән сюжеттар ҡыҙыҡ табыла. Улар ҡарай торған нәмәләрҙе беҙ инҡар итмәйбеҙ, "Йома"ла ҙур иғтибар бүләбеҙ. Сөнки ололарға онотоу - оло гонаһ, уларҙа бәрәкәт бар һәм өлкән йәштәгеләргә изге мөнәсәбәтебеҙҙә киләсәк быуындарға ҙур тәрбиә ята. Шул уҡ ваҡытта йәштәрҙе лә ҡыҙыҡһындырабыҙ, кескәй балаларҙы ла күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тырышабыҙ. Быныһы тағы ла һиҙгерлекте, зирәклекте талап итә. Мәктәптә эшләгән саҡта балаларҙы карьераға алып барғайныҡ. Ундағы ҙур машиналарҙы күреп, балалар һоҡланыр, тип уйлағайныҡ. Ләкин көтөлмәгән күренешкә шаһит булдыҡ. Бер бала ниндәйҙер бөжәкте күреп ҡалды ла иптәштәрен саҡырҙы. Бөтәһе лә шунда ябырылды, карьерҙа эшләгән техника хаҡында бөтөнләй онотто.

Бала күҙлегенән дә динебеҙҙе ҡарай һәм күрһәтә белергә кәрәк.

### Иҫтә ҡалған осрашыуҙар

Ниндәй генә районға сыҡһаң да, ихлас, инсафлы кешеләрҙе осратып шатланаһың. Ҡайһы бер саҡта пландан тыш тапшырыу эшләү зарурлығы тыуа. Ошондай саҡтарҙа, бигерәк тә үҙең белмәгән яҡтарға барғанда, фәһем бирә алырҙай, тапшырыуҙың геройы булырҙай кеше таба алырмынмы икән, тигән шик тыуа. Ләкин ошондай осраҡтарҙа ла Аллаһы Тәғәлә кәрәкле кешене юлыңа сығарып ҡуя ул. Ауылға барып инеп, кешеләр менән аралаша башлағас, ҙур хикмәт табаһың. Ишетеп тә белмәгән кеше аҡыл әйәләре кеүек ябай, шул уҡ ваҡытта тәрән фекер әйтеп һалыуы мөмкин. Ниндәй аҡыллы кешеләрҙе беҙ белмәйбеҙ, халыҡ араһында аҙ йөрөйбөҙ икән, тип уйлап ҡуяһың шунан.

Һәр бер осрашыу һабаҡ бирә, хәтерҙә ҡала. Авдон ауылында имам Илдар хәҙрәт Хәйруллиндың ғаиләһен күреү бик ныҡ тәьҫир иткәйне миңә. Ҡырҡты уҙған имам йәштәр менән бергә футбол уйнай, дзюдо, көрәш буйынса секцияларҙы ойоштороуҙа ҡатнаша. Ундағы тренерҙар мулланың фатихаһын килеп алалар, бергә намаҙ уҡыйҙар. Имамдың балалары ла мәктәптә алдынғылар рәтендә, әҙәптәре менән башҡаларға өлгө булып торалар. Урыҫ милләтле уҡытыусылар, директор был ғаиләне маҡтап телгә ала. Бына ошо ла инде динде дөрөҫ аңлау. Ислам - ул кешеләрҙән айырылып, башҡаларҙан үҙеңде өҫтөн итеп йәшәү түгел, дин ул башҡаларға кәрәкле булып йәмғиәттә йәшәү, әҙәбең, тырышлығың менән алдынғы булыу. Матур һүҙҙәр менән матур эштәр йәнәш килгәндә генә был кешене тетрәндерә, фәһем бирә. Шулай уҡ Ғафури районында марафонсы мулла Фәнил хәҙрәт менән аралашыуҙар хәтерҙә ҡалған. Әбйәлилдең Амангилде ауылынан Рәис хәҙрәт менән осрашһаҡ, һөйләшеп һүҙ бөтмәй. Шундай кешеләр һәр яҡта ла бар ул.

### Тәнҡитләүселәр ҙә була

"Мәсет асыуҙы күрһәтеү етәр инде", тип әйтеүселәр бар. Ысынында, хатта мәсет асыу кеүек ғәҙәти хәлгә әйләнеп бөткән күренештә лә фәһем алырға була. Алла йортон асыуҙа ҡатнашҡан кешеләрҙең күңелдәре асыҡ була, йөрәктән сыҡҡан һүҙҙәр әйтелә. Ә был һүҙҙәр күңелдәргә тәьҫир итә. Бары уларҙы ишетә, һәр нәмәлә хикмәт күрә белергә генә кәрәк. Эйе, күп нәмә тапшырыуҙы ҡараған кешенән дә тора. Әгәр берәү уға насар күҙлектән ҡарай икән, ул һәр саҡ хата эҙләргә тырышасаҡ. Ғәҙәттә, бындай кешеләр тапшырыуҙы тулыһынса ҡарамаған да була әле. Ҡыҙыҡ хәлдәр ҙә килеп сыға. Бер ағай даими рәүештә "Ниңә мәсеттәр хаҡында күп күрһәтәһегеҙ, дин бит мәсеттәр менән генә сикләнмәй?" тип шылтырата торғайны. Бер аҙҙан шул уҡ ағай "Ни өсөн мәсет тормошо хаҡында тапшырыуҙар аҙ?" тип шылтырата. Бәктиһән, мәсеткә эшкә алғандар ҙа, хәҙер уны ошо ҡыҙыҡһындыра икән.

Йыш ҡына "Һеҙ тапшырыуҙы дөрөҫ алып бармайһығыҙ, дин хаҡында дөрөҫ һөйләмәйһегеҙ", тип, диндәге үҙ йүнәлештәрен индерергә теләүселәр тауыш бирә. Кемгәлер тапшырыуҙар үтә халыҡсан кеүек күренә, улар дини тәғлимәт хаҡында күберәк мәғлүмәт талап итә. Икенселәр, киреһенсә, тапшырыуҙың халыҡсан булыуын һорай. Бер көн эсендә генә төрлө-төрлө биш фекер ишетергә тура килеүе бик мөмкин. Әммә беҙ эшебеҙҙе алтын урталыҡта тороп, бер кемде лә кәмһетмәй, бер кемде лә ситләтмәй, һәр кемдең тәнҡитенә ҡолаҡ һалып алып барырға тырышабыҙ.

Тағы ла шуныһы бар. Сикләүҙәр, тыйылған темалар була, тип әлектән әйтеп киләм. Был һәр илдә лә шулай. Ҡайһы бер кеше матур һүҙҙәр һөйләп, эштәре менән фетнәләр тыуҙырыуы мөмкин. Беҙ бындай кешеләрҙе эфирға сығармайбыҙ. Ләкин эфирға сығармауыбыҙ хөкүмәт ҡушҡан һәм мин ошо ҡарарға ҡунеккән өсөн түгел, ә динебеҙ фетнәнән йыраҡ булырға ҡушҡаны өсөн.

### Меңенсе тапшырыу хаҡында

Ысынлап та, 20 йыл буйы эфирҙа барған тапшырыуҙар һирәк, ә "Йома" 23 йыл тирәһе сыға килә. Тапшырыу сыға башлағанға 20 йыл тулғанда, ҙур юбилей кисәһе уҙғарайыҡ, тигән тәҡдим менән сығыусылар күп булғайны. Баш тарттым. Юбилей сараһын үткәреүҙә зарурлыҡ күрмәй инем, ойоштороу мәсьәләһе лә ҡурҡыттандыр. Ләкин хәҙер телевидение етәкселеге йәнә ошо мәсьәләне күтәрҙе. Ысынлап та, дөйөм республика телевидениеһы өсөн меңенсе тапшырыу ваҡиғаһы бик тә мөһим шул. "Йома" нигеҙендә яңы проекттар эшләнде, эшләнәсәк. Аллаға шөкөр, рус телендә "Әл-Фатиха" тапшырыуы килеп сыҡты. "Йома"ның маҡсаты динде бар яҡлап күрһәтеү булһа, "Әл-Фатиха" аныҡыраҡ йүнәлешле үҙ эсенә ала. Был уның көслө яғы, тип әйтер инем. Урыҫ телендә булыуы иһә, аудиторияны киңәйтә, хәҡиҡәттең башҡортса аңламағандарҙың зиһененә лә барып етеү мөкинлеген бирә. Динде рус телендә һөйләргә тейеш түгелһегеҙ, тип әйтеүселәр ҙә бар. Был ҡараш дөрөҫ түгел. Тыңлаусылар рус телендә генә аңлай икән, уларға рус телендә аңлатырға тейешбеҙ. Башҡортса аңламаған мосолмандарҙың булыуы насар түгел, үҙең башҡорт булып та балаларыңдың туған телеңде белмәүе - бына ошо насар.

### Аҙым һайын хикмәт

Аллаһы Тәғәлә мине дингә төрлө юлдар менән килтерҙе. Ағайым Афғанстанда хеҙмәт иткәндә ғәрәп хәрефтәре менән хат яҙып ебәрҙе. Ул ваҡытта "Ағиҙел" журналында ғәрәп телен өйрәнеү буйынса дәрестәр баҫыла башлағайны. Ағайымдың хатын уҡып, ғәрәпсә уҡырға өйрәндем, ғәрәпсә яуап яҙып ебәрҙем. Һуңынан да Аллаһы Тәғәлә яңынан-яңы мөмкинлектәр асып торҙо. Башҡорт дәүләт университетында ла ғәрәп телен өйрәнә башланыҡ. Бер ниндәй маҡсатһыҙ йәшәгән саҡтар ине ул осорҙа. Ләкин ошо ваҡыттарҙа ла Аллаһы Тәғәлә мәрхәмәтенән мәхрүм итмәне. Университеттан ике кешене Мысырға уҡырға ебәрергә, тигән ҡарар сыҡты. Был кешеләрҙе ҙур курстарҙан һайларға тейештәр ине. Кесерәк булһам да, уҡытыусым мине, ғәрәп телен барыһына ҡарағанда ла яҡшыраҡ белә, тип, Мысырға ебәртеүгә өлгәште.

Аллаһы Тәғәлә шулай үҙе йөрөтә, сәбәптәр бирә икән, уларҙы ҡуллана белергә генә кәрәк. Халҡыбыҙға ла Аллаһы Тәғәлә ошо мөмкинлектәрҙе биреп тора. Беҙҙә ғалим, әүлиә заттар күп булған. Күптән түгел республикаға Нәкшбәндиә тәриҡәте шәйехе Мәхмәт Әҙил килде. Уны бөтөн донъяла ил етәкселеге кимәлендә саҡыралар, ләкин ул бөтә ерҙәргә лә бармай. Ә беҙҙә дәүләт кимәлендә саҡырыу ҙа булманы - ул килде. Бына ул да бушҡа түгел. Әммә был тәкәбберләнер, үҙеңде башҡаларҙан өҫтөн ҡуйыр өсөн түгел. Был, беренсенән, бәхет, икенсенән, оло яуаплылыҡ.

Дингә килеүем, "Йома"ны алып бара башлауым тураһында уйлайым да, шундай һығымтаға киләм. Был тиккә булмаған. Минең олатайым аҡ күңелле, ихлас бер бабай ине. Ул һәр саҡ балалары, ейән-ейәнсәрҙәре өсөн изге доғалар ҡылды. Ана шул ата-бабаларыбыҙҙың изге доғалары беҙҙе ошо юлға килтергәндер инде, тип уйланам. Ошо доғалар беҙҙе һаҡлай.

Элек бөтә оло быуын вәкилдәре лә балаларына ҡарата ана шундай изге доғала булған. Бөгөн беҙ доға ҡыла беләбеҙме? Ошо хаҡта уйланам да, ҡурҡыныс булып китә. Беҙҙең быуын иң ҡаты, бәғерһеҙ алымдар ҡулланып тәрбиәләй түгелме балаларын? Балаһы яңылыштан бәләкәй сәскәгә үрелһә лә, урам тултырып әрләй, һүгенеү һүҙҙәре менән, ҡаты һүҙҙәр менән балаһын битәрләй. Ә бит кеше күңеленән сыҡҡан һәр һүҙ - ул доға. Ә ошо ҡаты мөнәсәбәт, бәддоға булып, балалар өсөн насар әҙемтәләргә килтермәҫме? Беҙ ата-бабаларыбыҙҙың доғалары ярҙамы менән имен, иманлы йәшәйбеҙ, ә бөгөнгө быуынға бәддоғалар әйтелһә, улар ни эшләр?

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ**
**яҙып алды.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Октябрь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (12) дүшәмбе | 6:59 | 8:29 | 14:30 | 18:08 | 19:38 | 21:08 |
| 7 (13) шишәмбе | 7:01 | 8:31 | 14:30 | 18:06 | 19:36 | 21:06 |
| 8 (14) шаршамбы | 7:03 | 8:33 | 14:30 | 18:03 | 19:33 | 21:03 |
| 9 (15) кесе йома | 7:05 | 8:35 | 14:30 | 18:01 | 19:31 | 21:01 |
| 10 (16) йома | 7:07 | 8:37 | 14:30 | 17:58 | 19:28 | 20:58 |
| 11 (17) шәмбе | 7:08 | 8:38 | 14:30 | 17:56 | 19:26 | 20:56 |
| 12 (18) йәкшәмбе | 7:10 | 8:40 | 14:30 | 17:53 | 19:23 | 20:53 |

*"Дини тәҡүим"дән алынды.*

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

**Эске тәртип: һеҙҙең башланғысығыҙҙа торған иң беренсе кеше - үҙегеҙ**

"Иң беренсе һәм мөһим енеү - үҙ-үҙеңде енеү. Характерында тәүәккәллек булмаған кеше бер ваҡытта ла үҙ-үҙенә хужа түгел... Ул үҙен әсир яһай алған теләнә кемдеке", тигән Джон Фостер исемле бер әҙәбиәтсе.

Эйе, үргә юл һәр саҡ ауыр. Унда бары тик һирәктәр генә менеп етә һәм уларҙы, үҙ эшенең оҫтаһы, тиҙәр. Әммә бик аҙҙарҙы ғына һәр ваҡытта ла иң-иңдәр тип иҫәпләйҙәр.

Лидер ни тиклем һәләтле булмаһын, уға тәбиғәттән бирелгән талант, тәртип булмайынса, бер ваҡытта ла үҫмәйәсәк, камиллашмаясаҡ. Тап тәртип лидерға иң юғары ҡаҙаныштарға өлгәшергә һәм оҙайлы ваҡыт лидерлыҡта булырға ярҙам итә.

**Әгәр һеҙ активтарында эске тәртип булған лидерҙар иҫәбенә инергә теләйһегеҙ икән, түбәндәге ҡағиҙәләрҙе үтәгеҙ:**

**Өҫтөнлөктәр билдәләгеҙ һәм бер ваҡытта ла улар хаҡында онотмағыҙ.** Күңеле булғанда йәки уңайлы булғанда ғына нимәлер эшләгән кеше бер ваҡытта ла ысын уңышҡа өлгәшмәйәсәк. Тирә-яҡтағылары ла уны бер ваҡытта ла ихтирам итмәйәсәк һәм артынан эйәрмәйәсәк. Кемдер бер ваҡыт: "Мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн ике нәмә кәрәк: план һәм ваҡыт ҡыҫынҡылығы", - тигән. Лидер булараҡ, һеҙ ваҡыт ҡыҫынҡылығына эйәһегеҙ. Һеҙгә кәрәк берҙән-бер нәмә - план. Әгәр ошо мәлдә нимә һеҙҙең өсөн өҫтөнлөклө булыуын асыҡлай алһағыҙ, башҡа нәмәләрҙән айырылып, ғәмәлдә мөһим булған эште башҡарыуы ауырлыҡ тыуҙырмаҫ. Эске тәртиптең асылы шуға ҡайтып ҡала ла инде.

**Тәртип буйынса барған тормош рәүешен маҡсат итеп алығыҙ.** Теләһә ҡайһы ныҡ тәртип яратҡан кешенең биографияһын өйрәнеп, эске тәртиптең бер тапҡыр ғына ҡулланыла торған нәмә түгеллегенә, уның тормош рәүешенә әйләнергә тейешлегенә инанырһығыҙ. Быға өлгәшеү өсөн иң яҡшыһы - оҙайлы үҫешегеҙ һәм уңыш өсөн мотлаҡ кәрәк булған өлкәләрҙә даими рәүештә ҡулланыла торған стандарт процедуралар булдырыу һәм шуларҙан башлау. Мәҫәлән, мин һәр саҡ яҙышҡас һәм лекциялар менән сығыш яһағас, һәр көн алдағы көндәрҙә ҡулланылырға тейешле материал туплай барам. Ә 1998 йылда йөрәк өйәнәге үткәргәндән һуң һәр көн иртән физик күнегеүҙәр эшләйем. Был ғәмәлдәр ниндәйҙер ваҡытта башҡарылып, һуңынан ташлап ҡуйыла торғандарҙан түгел, мин улар менән ғүмер буйы шөғөлләнергә тейеш.

**Үҙ-үҙегеҙҙе аҡламағыҙ.** Тәртипкә нигеҙләнгән тормош рәүеше нормаға әүерелһен өсөн иң тәүге бурыс - үҙенә аҡланыу эҙләмәү һәм ниндәйҙер хәл-торошҡа япһармау. Әгәр эске тәртипкә өлгәшеүгә ҡамасаулаған ниндәйҙер сәбәптәр бар икән, уларҙың ғәмәлдә аҡланыу икәнлеген һәм, лидер булараҡ, юғарыраҡ кимәлгә күтәрелеү өсөн уларға бирешергә ярамағанлығын аңларға тейешһегеҙ.



## 6 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.10 "Мужское/Женское".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Дом с лилиями". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Рэй Донован". Сериал (16+).
02.20, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.20 "В наше время" (12+).
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00, 03.20 "Салам, учитель!"
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
